*Розалия **СОЛТАНГӘРӘЕВА,***
*филология фәндәре докторы*

# Уралып ята халыҡ хәтерендә

Башҡорт халҡының бөйөк эпосы “Урал батыр”ҙы тере хәтер һәм телдән яҙып алыуға 105 йыл үтеп китте. Мәшһүр сәсән Мөхәмәтша Буранғол эпосты Баймаҡ районы (элек Ырымбур губернияһы) Иҙрис ауылында Ғәбит сәсән Арғынбаевтан (1855—1921) һәм Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтан (1861—1923) 1910 йылда яҙып ала. Эпосты телдән уларға Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан (элек Теләү волосы Тамъян-Ҡатай кантоны) данлыҡлы Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев (1781—1879) һөйләүе билдәле. Әбйәлилдәр Исмаҡай ауылын ошо изге ваҡиға менән бәйләй.

Унан һуң эпостың сәсмә телдә һөйләнгән ҙур булмаған версияһын 1984 йылда Ейәнсура районының Ғәббәс ауылында Сәфәрғәлина Шәмсиә Сәфәрғәле ҡыҙынан (1929) БДУ студентҡаһы Г.Сәфәрғәлина яҙып алған. Эпостың халыҡта таралыу ареалы шаҡтай киң булыуы билдәле: 1956 йылда Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тыумышы буйынса Учалы районы Имәнғол ауылы кешеһе Исмәғил Рәхмәтуллиндан Ә.И.Харисов яҙып алған булған. Бөйөк хазинаның телдән телгә тапшырылып килеүе — әҫәрҙең этник, милли паспорты билгеһе булыуының иң аныҡ дәлиле. Шуға ла XX—XXI быуаттарҙа эпостың телдән һөйләнелә килгән өлгөләрен яҙып алыу оло, изге маҡсат булып ҡала килде. Эпос тураһында белеүселәрҙең бәләкәй генә хәбәре лә — ҡиммәтле сығанаҡ. 2010 йылда Сибайҙа үткән II Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияла сығыш яһаған З.Билаловтың эпосты тыңлап үҫеүе тураһындағы һүҙе бик кәрәкле яңылыҡ булараҡ ҡабул ителде. Бөйөк әҫәрҙе ул Йылайыр районы Үрге Смаҡ ауылында йәшәүсе Ҡинйәбикә Юлановананан бәләкәй сағында тыңлаған. “Эпосты һөйләү бер нисә төнгә һуҙыла ине”, — тине ул, 1938—1939 йылдарҙы хәтерләп.

Һомайҙы Һөмәйрә тип әйтер булған Ҡинйәбикә инәй. Эпосты башлыса шиғри телдә һөйләгән өҙөктә Урал батырҙың мәшһүр килбәте, сағыу образы З.Билаловтың иҫендә уйылып ҡалған: ул бик һылыу, көслө, сәстәре май ҡылғаны кеүек (тимәк, аҡһыл-йәшел, күкһел), ә күҙҙәре ҙур һәм йәшел, киң далалар һәм тауҙар кеүек нурлы булған... Был сифаттар иһә бөйөк башҡорт пәйғәмбәренең (башҡорт архетибының) бик үҙенсәлекле этник килбәтенә ишара, йәғни башҡорттоң антропологик күрһәткестәрендә европалыҡ һыҙаттары (архаик ҡыпсаҡ компоненты) өҫтөнлөк итеүенә — аҡ йөҙ, күкһел йә һары сәс, оҙон буй (билдәле антрополог Р.Йосопов билдәләүенсә) бик сағыу бер дәлилдер.

Фольклорсы Г.Юлдыбаева З.Билаловтан яҙып алыуынса, “Ҡинйәбикә инәй иртәгәһен ҡайҙа туҡтап ҡалыуын һорар һәм шул урындан һөйләүен дауам итер, һөйләүе менән балаларҙы тыңлатыр, хайран итер икән”. Был күҙәтеү ҙур әһәмиәткә эйә һәм бөйөк эпостың халыҡ хәтерендә хатта һуңғы быҡыттарға тиклем йәшәп килеүен раҫлай.

З.Билаловтың “Урал батыр”ҙы хәтерҙән һөйләүҙе ишетеүгә шаһитлыҡ (Г.Юлдыбаеваның) үҙе үк яҡшы яңылыҡ, мөһим мәғлүмәт. Әммә текстың үҙен

һөйләү, телдән телгә нисек тапшырылған, шулай һөйләп күрһәтеү башҡорт фәне өсөн актуаль мәсьәлә булып ҡала килде, һәм беҙ эҙләнеүҙе дауам иттек. Сөнки ЮНЕСКО-ның кешелектең матди булмаған рухи ҡаҙаныштары исемлегенә инеүҙең төп шарты булып халыҡ эҫәренең телдән телгә һөйләнелеүе, һаҡланыуы тора.

Ниһайәт, 2010 йылдың июнь айы (ул ваҡыт инәйҙең бер уйын һамағын әйтеп, Урал исеме менән бәйләүе өмөт тыуҙырҙы), унан 2010 йылдың 9 сентябрь көнө минең өсөн билгеле, моратлы көндәрҙең береһенә әйләнде.

Республикабыҙҙа киң билдәле сәсәниә Әсмә Усманова менән бик күптән танышмын. Унан, йыл һайын тиерлек осрашып, һирәк ишетелгән йырҙар, бәйеттәр, ер-һыу, милли кейем тарихы, боронғо йолалар, легенда-риүәйәттәрҙе яҙып ала барҙым. Уның хәтере төпһөҙ тере шишмә кеүек. Зәйнулла Рәсүлевтың үҙендә уҡыған ҡартатаһы Ғ.Торомтаев (1864—1942), әлбиттә, ейәнсәре өсөн ифрат ҡиммәтле мәктәп була. Орск, Ырымбур ҡалаларында үткән һәр йыйында Ғәбделәхәт сәсән үҙенең ҡобайырҙары, йырҙары, көләмәстәре менән сығыш яһар булған.

"Һәр ерҙә ҡоба һүҙ һөйләп йөрөгөҙ. Ул көслө, яҡшы һүҙ. Уны һөйләгән кеше еңелмәҫ була!" — тип әйтер булған ҡартатаһы балаларына. Ҡоба һүҙгә шулай ул тылсымлы йөкмәтке лә һалған, ә асылда иһә ул яҡшылыҡ эшлә, һис бирешмә, хатта "таш менән атҡанға аш менән ат" тигән аҡылды ла ошо ҡоба һүҙ менән бәйләр булған. Дини ҡараштары өсөн бер нисә рәт төрмәгә эләккән Ғәбделәхәт олатай ошо һүҙ менән яуыздарҙың "телен бәйләгәнен", "йоҙаҡ сискәнен" дә әйтеп, Әсмә инәйҙең атаһы Мәүләнбирҙе лә ҡоба һүҙ көсөн ҡыҙына әйтеп ҡалдыра.

— Ә ҡобайыр тип өлкәндәр һүҙ һөйләйҙәр инеме, Әсмә инәй?

— Ҡобайыр һүҙен мин аҙаҡ ишеттем, китаптан. Ҡарһүҙ һөйләйем, ти ине ул...

— Ә "Урал батыр"ҙы бер ҙә ишеткәнегеҙ булманымы ни?

— Булды. Нишләп булмаһын!

Минең йөрәк тарҫлап китте:

— Ә нисә йәштә инегеҙ?

— 8—9 йәштәрҙә, мин уларҙа күп торҙом, ятып уҡыным. Һөйләй торғайнылар. Тимәк, исмаһам, бер нисә юлы булһа ла хәтерҙәлер... Мин ошо үтенесте күп информаторҙарға еткергән булдым. "Эйе, шундай батыр булған, көслө булған", "Дошмандарҙы ҡырған..." кеүек яуаптарҙан башҡаһы булманы. Ә бында...

Әсмә инәйем уйға ҡалды һәм минең әйтеп бөтмәҫ шатлығыма шатлыҡ өҫтәп, һөйләп алып китте. Ул бер нисә юл ғына булманы.

Эпосты беренсе тапҡыр иҫләй биргәндә Хәйбуллала экспедицияла инем (төнө буйы йолалар, костюмдар хаҡында һөйләшеп, тик аҙаҡ ҡына һүҙ ҡуҙғаттым). Инәй: "Ул бик күп, августа Өфөгә барам, һөйләрмен", — тигәс, хәтер ҡошон өркөтмәйем тип, сабыр булдым, ныҡышманым. Ә инде яҙып алғанда, ул Өфөлә ине һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тәүге яҙма эшләнде. Уның ҡайтыр ваҡыты етеү сәбәпле, эпостың бер өлөшөн генә, бигерәк тә көйлөләрен яҙып алдым. Өсөнсө осрашыу йәнә Хәйбулла районы Аҡъярҙа 27—28 октябрҙә булды. Бына ошонда тыныслап ултырып һөйләне ул. Эпосты балаларға ҡартинәйе Мөьминә Һаҡҡол ҡыҙы Тауылбаева-Таймасова (1870 —1973, Хәйбулла районы Юлбарыҫ (Ерәнағас) ауылында тыуған) кис һайын тиерлек һөйләгән булған. Әсмә инәй ул ваҡытта (1939—1940 йылдарҙа) Ҡаҙыршала өләсәйендә тороп уҡыған. Мөьминә өләсәһе (Әсмә инәйҙең әсәһенең әсәһе) Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылынан Тауылбаев Юлмөхәмәт мәзингә кейәүгә сыҡҡан булған. "Өләсәйем бик күп йыр белә ине, бик матур йырланы. "Урал батыр"ҙы ҡат-ҡат, ҡыштарын бер нисә кис һөйләне. Күберәген хатта көйләй ине", — тип хәтерләне Әсмә инәй.

## Сәсәниәнең тормош ағасы

Әсмә Мәүләнбирҙе ҡыҙы Усманова 1930 йылдың 10 авгусында Хәйбулла районы Утарбай ауылында тыуған (хәҙер ул ауыл юҡ, 1963 йылда бөткән). Утарбайҙар Ивановка (элек Иһәмбәт) ауылына күсә. Шәжәрәһе, ырыу ағасы тамырҙары бик тәрән Әсмә сәсәниәнең. Атаһы — Мәүләнбирҙе Торомтаев (1909—1993), уның атаһы — Ғәбделәхәт Торомтаев (1864—1942), уның атаһы — Бәҙәмша хәлфә Торомтаев (1836—1905), уның атаһы — Утарбай Торомтаев (1788—1860), уның атаһы — Солтангәрәй, шунан Ғәҙелгәрәй — Ғәҙелмырҙа — Йылҡыбай — Торомтай. Шулай ҡош исеменә бәйле була был ырыу заты. Салауат яуынан һуң тоҡомдо, динде һаҡлау, юғалтмау өсөн ырыу был урындан күсеп китә.

Һабыр Ҡотломбәтов батырға эйәреп, нәҫелдәре түбәнге Һаҡмарҙың уң яғына, тауҙар араһына барып йәшәгән. “Ә Торомтаевтар, Атановтар иһә Миәкә яғынан, Меңле ырыуынан булған, хәҙер тоҡомдары Үҫәргән булып бөткән инде. Мин үҙемде Мең тоҡомо тип һанайым!” — ти Әсмә инәй. Торомтай тоҡомонан үҙенең сығышы бик ҡыҙыҡлы риүәйәткә бәйле.

“Бер бик бай егет була. Үҙе ҡурайсы, көрәшсе, бик һөнәрле, ал бирмәй бер кемгә. Атта бик оҫта йөрөр мәргән һунарсы, оҫта йырсы. Тирә-яҡҡа даны таралған бик һылыу, бик уңған, сибәр, йырсы, сәсән телле ҡыҙ ҙа булған. Тик уның атаәсәһе ярлы икән. Ошо бай улына ғашиҡ була. Уның үҙенә тиң түгеллеген белеп, егетте йылғыр, һылыу ҡош — торомтайға тиңләп, был егеткә арнап йыр сығарған. Йыш йырлағандар был йырҙы. Егеткә һөйөүен исемләп әйтә алмаған бит инде”. Ә йыр — ишара. Әсмә инәй моңло тауышы менән әкрен генә йыр һуҙҙы:

1. Оҙон ғына ҡойроҡ, оҙон ҡанат,
Осоп килә ҡара болоттай.
Баш осомда өйөрөлә,
Әй, йылғыр ҙа ҡошом торомтай,
Торомтай!
Һиңә бағлай минең күңелкәй!
2. Ҡанат осо ҡара, муйыны ала,
Инәләре уның көрәнтәй.
Тау шишмәһе ағышындай
Көр тауышың һинең, торомтай,
Торомтай!
Һиңә бағла(й) минең күңелкәй!
3. Ағас башы бейек, йә ҡаяға
Ояларын ҡора торомтай.
Бигерәк тә болоҡһойом
Алыҫ китһәң, ҡошом, торомтай!
Торомтай!
Һиңә бағла(й) минең күңелкәй!

Егет ҡыҙҙы күрмәһә лә, шул йырҙы ишеткәс, ҡыҙға ғашиҡ була. Еңгәләренә әйтеп, тегеләре уларҙы осраштыра. Никах уҡыла. Бер аҙҙан яңы тыуған улдарына йәштәр Торомтай тип исем ҡуша. Шунан башланып китә Торомтаевтар”. Әсмә инәй Торомтай көйөн ҡартатаһы Ғәбделәхәттән 1940 йылда өйрәнә. “Тоҡом йыры ул, бел!” — тигән ул.

— Ниндәй ҡош ул торомтай? — тип һорағас, Әсмә инәйгә олатаһы:

— Моһ, шуны ла белмәйһеңме? Ҡанатын киң йәйеп оса, табышын күрһә — атылып килеп төшә, бик мәргән хәрәкәтле, йылғыр, ҡанаты ҙур булғас, арымай ул ҡош. Тәүҙә оҙаҡ ҡорбанын ҡарай. Унан атылып килеп ала, — тигән.

Торомтаев Солтангәрәйҙең улы Утарбай (1788) 1812 йылғы француз яуына китә. Зирәк, аҡыллы, йырсы, дин тәғлимәтен, фарсы, ғәрәп телдәрен һәйбәт белгән кеше булараҡ, яуҙа полк хәҙрәте вазифаһын үтәй. Офицер булып ҡайта. Үҙ аҡсаһына (бик матур ғына бол йыя) мәсет һалдыра.

Уның улы Бәҙәмша хәлфә лә (1836—1905) дин әһеле, әүлиә, хаж ҡылыусы була. Ул да ауылға мәсет һалдыра. Ҡешенең уйын алдан белеп, күрәсәген күреп торған, тигәндәр. Бәҙәмша хәлфәнең улы Ғәбделәхәт (1864—1942) — Әсмә инәйҙең ҡартатаһы ла хәҙрәт була, сәсәнлеге, көслө йырсыллығы менән дан ала. Троицкиҙа Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәһендә белем ала. Ҡайтҡас, мәсеттә эшләргә тура килмәй уға. Сөнки Ғәбделәхәт Торомтаев кешеләр араһында, асыҡ йыйындарҙа йөрөргә ярата. Ғәҙеллек яҡлап, илде, ерҙе данлап йырҙар, ҡобайырҙар башҡарып йөрөй. Бер ваҡыт өлкәндәр йыйылғанда “Ҡәғбәтең вә зәмзәмең” тигән мөнәжәт әйтә. Быны ишеткән бер дин әһеле: “Мулла булмағандың балаһы мулла булам тип йөрөү — ғәжәп, мулла булғандың балаһы мулла булыу — ғәҙәт”, — тигән. Ошонан һуң сәмләнгән Ғәбделәхәт Торомтаев үҙенең иптәштәре Нуриев Вәлиәхмәт (Байғусҡарҙан), Исҡужин (Йәнтештән) менән Өфөгә уҡырға китә. Имтиханды бирә алмаҫбыҙ, тигәнгә Ғәбделәхәт: “Мин уны көйләп, йырлап булһа ла бирермен!” — ти. Шул һүҙ халыҡта: “Әхәт муллалай йырлап, көйләп булһа ла эште үтәрбеҙ әле”, — тигән лаҡап ҡала. Өфөнән ҡайтып, Ғәбделәхәт Торомтаев мәсеттә мәзин вазифаһын үтәй. Уның тауышы шул тиклем көслө булған — мәсет манараһынан әйткән аҙан тауышы Утарбайҙан 3 саҡрым алыҫлыҡтағы Олтораҡ ауылына ишетелеп торған! Тауышы көслө кеше оло фекерле, ҡеүәтле рухлы була, мәгәр. Был тәжрибә лә халыҡта йәшәй.

Әсмә инәйҙең атаһы Мәүләнбирҙе һөйләүенсә, Ғәбделәхәт мулла һәр бер урында көйләргә, һөйләргә, йырларға әҙер булған, бер кемгә ал бирмәгән. Орск, Ырымбур йыйындарында данлыҡлы, билдәле кеше була. Бына кемдән сәсән дауамы Әсмә Усмановала! Әммә яҙған йырҙарын, шиғыр-ҡобайырҙарын ауыл советындағы аңһау бедняктары тентеү яһап яндыралар. Себергә ебәрер булғас, оло улына әйтә: “Был ҡәһәр һиңә лә тейер, бирешмә. Ата-баба һүҙен тотоғоҙ, һүҙегеҙ ҡоба булһын, таш атҡанға аш менән атығыҙ!” — тигән:

Урал батырҙай һеҙ батыр булығыҙ,
Яҡшылыҡты ғына белегеҙ,
Яҡшылыҡты ғына һөйләгеҙ,
Яҡшы булһын һәр бер һүҙегеҙ,
Ата-баба һүҙен тотоғоҙ,
Ҡоба һүҙҙе генә тотоғоҙ!

“Яуызлыҡ уға теймәй, Себерҙән ҡотола. Теге НКВД-ларҙың телен ҡатырып, күҙен баҫтырып тик торған доғалары менән!” — ти Әсмә инәй. Бына ошондай мәшһүр, дәрәжәле һәм ғилемле зат-ырыуҙан сыҡҡан Әсмә сәсән Торомтаева (Усманова). Ә инде уның өләсәһе Таймасова Мөьминә Һаҡҡол ҡыҙы (1870—1973) халыҡ йырын оҫта башҡарыусы, сәсән телле була. Ошо оло йөрәкле уҡытыусынан Әсмә инәй затлы тәрбиә алып үҫә.

“Урал батыр”ҙы төндәр буйы һөйләй ине өләсәйем”, — тине Әсмә инәй. Был һөйләшеүгә биш йыл үтте (2010). Әсмә инәй хәтер төпкөлөнә һалып ҡуйған бөйөк хазинаны ҡәҙерләп асып бирҙе. “Бер ары мин уны онотҡан инем. Ҡешегә лә һөйләү юҡ бит инде. Шунан “Урал батыр”ҙы һөйләүселәр конкурсы иғлан ителгәс, уйлай-хәтерләй башланым. Китаптағынан минең белгән айырыла ине. Шунан конкурсҡа барманым. Әллә нимә һөйләйһең тип, йә бер-бер һүҙ әйтерҙәр тинем. Бара ла алмаҫ инем, ул ваҡыт ағайым ҡаты ауырый ине, уны ҡараным. Шул килеш

ҡалды. Бына, һин һорағас, иҫкә төшә башланы", — тип аңлатты. Сәсәниәнән был аманатты ике рәт яҙып алдым һәм сюжет бөтөнләгәндә тулы текст шулай яйлап хасил булды. Һәр осрашҡан һайын Әсмә инәйгә шарт ҡуйҙым: китаптағы тексты уҡымағыҙ! Мөьминә өләсәйегеҙҙең һөйләгәнен иҫләгеҙ! Һәм шулай булды ла. 4556 юллыҡ "Урал батыр" эпосы тергеҙелмәһә лә, М.Буранғолов яҙып алған мәлдән һуң был яҙма көйлө, һүҙле, башҡарыу хәрәкәттәре үҙенсәлегендә яҙып алынған тәүге оло табыш булды. Эпосты китаптан уҡып түгел, ә телдән телгә, хәтерҙән хәтергә башҡарылып тапшырылыуы ифрат мөһим! Ә бит көйө лә юғалған, һөйләүселәр ҙә юҡ, тигән һылтауҙар башҡорт эпосының, ғөмүмән, булыуына шик ине. Әсмә инәй тулы сюжетты телдән ике сәғәт самаһы һөйләне. Эпизодтарҙың төшөп ҡалғандары булһа ла, ошо килеш башҡорттоң баш эпосын XXI быуатҡа еткереү — халыҡ тарихы өсөн оло күренеш. Сөнки тере хәтерҙән, телдән телгә тапшырып башҡарылған әҫәрҙәр генә халыҡтың милли мираҫы була ала, тигән билдәләмә бар ЮНЕСКО талаптары буйынса. Аллаһы Тәғәләгә шөкөран ҡылам, сәбәп иткәнемә сығарып ҡуйҙы. Башҡорт халҡында бөйөк эпосты яттан, халыҡ традициялары буйынса тере һөйләү рәүеше йәшәй! Был — тарихи ваҡиға! Беҙҙең тарихтың, башҡорт хәтеренең ныҡлығын һәм боронғолоғон раҫлай торған оло ҡаҙаныш!

Башҡорт халҡының тарихи дәүерҙәрҙә лайыҡлы үҫешкәнен, хәтере, аҡылы, юлы киләсәккә йүнәлгәнен асыҡ дәлилләй был күренеш. Сөнки эпос боронборондан бер идеология, бер маҡсат һәм йүнәлештә, бер ҙур ер-биләмәлә ойошҡан бер тамыр телле, төрлө ҡәбиләләр берлегенән үҫешкән халыҡтың ғына ҡаҙанышы була ала. Йыйылма һәм ерһеҙ, күсеп йәки һуңыраҡ дәүерҙә формалашҡан халыҡтың эпосы булмай. Сөнки эпосһыҙ халыҡ мифологик үҫеш дәүерен кисермәгән.

Тәү бәйән иткәндә Әсмә инәй Шүлгәндең исемен, өләсәһе хәтерен һаҡлап тигәндәй, әйтмәне. Тик ҡарһүҙҙең аҙағын һөйләгәндә генә: "Ул яуыз ҡанһыҙ ағаһы күлгә төшкән. Уның яманлығын күтәрмәй, күл хатта шиңгән. Шунан башлап был күл исеме "шиңгән" һүҙенән Шүлгән булып ҡалған", — тип аныҡлап ҡуйҙы өләсәһенең һүҙен.

Һомайҙы Һөмәйрә, Самрауҙы Сәмерҡош тип һөйләр булған Мөьминә әбей.

— Әкиәт тип һөйләнеме, ҡобайыр типме?

— Ҡобайыр тимәне ул, ҡар(ы)һүҙ һөйләйем тине. Урал батыр тураһында ҡараһүҙ һөйләйем, ти торғайны. Эйе. Был оло әкиәт, тип тә ҡуя ине...

Әсмә сәсән һөйләгән, телдән телгә килгән был изге аманат "Башҡорт халыҡ ижады" томында баҫылған төп текстан күп деталдәре менән айырыла, сюжетта йәки образдарҙың һынланышында бик ҡыҙыҡлы үҙенсәлектәр бар. Әсмә инәй эпосты нисек һөйләгән, шулай еткерәбеҙ. Ҡайһы урында туҡтап, уйлап торғанын, һүҙҙәрҙе ҡабатлағанын да ҡағыҙға төшөрөргә тырыштыҡ.

Һөйләр алдынан Әсмә инәйгә һорау бирҙем:

— Ә ни өсөн һөйләне ул һеҙгә "Урал батыр"ҙы?

Әсмә инәй хәтеренә бер хикмәтле ваҡиғаны төшөрҙө.

— Бәләкәй саҡта уйнағанда ("йәшенмәк", "гөр-гөр", "баҫтырыш" уйнайбыҙ) һанамыштар әйтешә инек:

— Әбей, ҡайҙа бараһың?

— Күршеләргә барамын.

— Анда нәмәкәйең бар?

— Оса торған ҡошом бар!

— Ике балыҡ һуғышҡан,
Аның ҡанын кем эскән?

— Аҡ һаҡаллы ҡарт эскән!

Ошоно ҡартәсәйем ишетеп, мине саҡырып алды: “Ҡан эскән тигәнде әйтмәгеҙ! Икенсене әйтегеҙ”, — тип миңә бер һанамыш өйрәтте:

Ала таң, бола таң,
Тимер ҡаҙыҡ бит атаң,
Беләһеңме үҙ затың?
Урал батыр бит атаң!
Аяҙ төндә күккә баҡ,
Юл күрһәтер атың,
Күрерһең унда атаң.

Һары атың йүгәнле,
Аҡбуҙатың эйәрле,
Торған ерең аласыҡ,
Үҙең менән ал янсыҡ,
Тирә-яғың байҡап сыҡ,
Тиҙерәк йүгереп сыҡ,
Бында торма, бар сыҡ!

Шунан һуң өләсәйем: “Ана, Өлкәр йондоҙ, Тимер ҡаҙыҡ, Етегән йондоҙ, белегеҙ!” — тип күктәге йондоҙҙарҙы күрһәтте. Аяҙ кисен Етегән, Өлкәр, Тимер ҡаҙыҡ, Ҡош юлы асыҡ күренеп тора. Ошоно хәтерләп, өләсәһенең ҡәҙерен һаҡлап, “Ҡош юлы” тип исемләй Әсмә Усманова үҙе ойошторған фольклор ансамблен. 25 йыл етәкләй ул уны. Халыҡтан яҙып алған йыр, йола, риүәйәттәрҙе, бейеүҙәрҙе сәхнәләштерә, сценарийҙарҙы үҙе яҙа, репетициялар, конкурстар, еңеүҙәр, алһыҙ-ялһыҙ эшләү... Мөьминә өләсәһе һөйләгәне һаман иҫендә: “Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо ҡашындағы Һары йондоҙ, унан Аҡ йондоҙ — улар толпарҙар. Урал батыр шикелле батырҙар тыуһа ғына, ул аттарға хужа булырҙар”. Ә мин уйлап ҡуям: бәлки, бер нисә быуаттан һуң кешенең йондоҙҙарға осоп, уларҙы үҙләштереүҙе күҙалламаған микән башҡорт ошондай кинәйәлә?! “Толпарҙар ерҙә көслө хужаларға ғына баш бирә. Ә батырҙар шул толпарҙар ярҙамында илгә бәхет килтерер, Хоҙай ярҙам итһен!” — тип ныҡлап ҡуйҙы һүҙен сәсәниә. “Өләсәйем “Алпамыша”ны, “Алтын ашыҡ”, “Аҡ бүре”, “Аҡъял батыр”ҙы һөйләне. Шулай ҡарһүҙ күп һөйләне. Йыр дәресендә гел “5”-ле ала инем. Шунан ҡарһүҙҙе йырлап-көйләп әйтәйем һинең кеүек, тип һорағас, өләсәйем: “Ул йыр түгел”, — тине. Шунда “Урал батыр” ҡарһүҙен әйтте.

Ҡайһы урында үҙ һүҙе менән әйтә, кәрәк ерендә шиғыр менән әйтеп ебәрә, кәрәк ерендә көйләй торғайны, тип баш һүҙен төҙөнө Әсмә Усманова. “Ҡан эскән кешене һөйләмәгеҙ. Ул яман кеше булған!” — тигән өләсәһе. Шулай итеп, Шүлгән исемен күп ваҡыт Мөьминә инәй әйтмәҫ булған хатта. Күрәбеҙ, халыҡ боронғоно һөйләүҙә лә этик, әхлаҡи маҡсат ҡуйған. Әммә борон ҡурҡыныс хәлдәрҙе һөйләү йәки ҡурҡыуҙы еңә торған уйындар (“Һуҡыр тәкә”, “Ҡасышлы”, “Әбәк” һ.б.) уйнауҙың махсус функцияһы булған. Баланың психик үҫешен сыныҡтырыу, сәләмәтлеген, еңеүсе холҡон тәрбиәләү шулай атҡарылған.

— Сәмерҡош ниндәй булған ул?

— Сәмерҡош кеүек башың икәүме? — тип әйтәләр. Берәй кеше ҡулынан килмәгән эш эшләргә ниәт итһә, шулай тигәндәр. Сәмерҡош ике башлы, тиҙәр. Уның башы берәү. Фекер йөрөтөү дәрәжәһе икәү. Бик аҡыллы, күрәҙә, күп белә, урынлы ҡуллана аҡылын. Шуға уны ике башлы, тиҙәр. Бик аҡыллы ҡош булғандыр. Кем һуң ул Урал батыр, тигәс, өләсәйем ошо ҡарһүҙҙе һөйләне, — тине Әсмә инәй. — Ана, ҡан эскән кеше яман булған, ә ҡан эсмәгән кеше — Урал яҡшы булған!

Эпик әҫәрҙе тере хәтерҙән һөйләү, халыҡ традицияларының һаҡлана килеүе — ЮНЕСКО-ның кешелектең матди булмаған рухи ҡаҙаныштары исемлегенә индереү өсөн төп күрһәткестәрҙең береһе. Инде ул дәлил беҙҙең бар! “Урал батыр”ҙың был версияһы урыҡ-һурыҡ ҡына һөйләнелгән өлгө булманы. Тулыһынса тиерлек сюжет төҙөклөгөндә бөйөк ҡобайырыбыҙ тере хәтерҙә һаман йәшәй! Ул ғына ла түгел, көйлө һамаҡтары бар.

Бөйөк эпик әҫәрҙең көйө лә һис юғала торған түгел! Төрлө дауыллы йылдарҙа телен киҫеп, сәсәндәрҙе эҙәрлекләүҙәр булһа ла, көй тылсымы юғалмай! Сөнки ул көслө энергетика, тылсым сығанағы, йөҙәр йыл буйы халыҡ аңы, моңо, телендә тыҡылып йәшәгән. Нисә быуын батырҙары, сәсәндәре уны тыңлап үҫкән! Эпос көйө халыҡ хәтерендә йәшәү юлын таба. Төрлө һамаҡ, бейеү көйө, таҡмаҡта йәки әкиәт эсендә көйләнелгән рифмалы шиғри юлдарға "һеңеп", үҙ ғүмерен шулай дауам итә ул. Ошо һиҙемләү мине халыҡ хәтерендә популяр көйҙәр — "Старшина Мәсәғүт", бәйеттәрҙә, әкиәттәрҙә яңғыраған эпик ауаздарҙы ишетергә һәм бөйөк ҡобайыр тәбиғәтенә ярашлығын аңлау мөмкинлеген бирҙе! Һәм Әсмә инәйҙе тыңлағандағы Аҡбуҙатты маҡтау, Һөмәйрә — Урал, Аҡбуҙат һөйләшеүе һ.б. көйлө эпизодтар ошоно раҫланы. Улар үрҙә әйтелгән көйҙәр менән бик яҡын яңғырашта. Әсмә инәйҙән яҙып алынған көйҙәр артабан "Урал батыр" эпосын һөйләүҙең мелос нигеҙе булыр. Һәр уралсы уларҙы белергә тейеш. Ритм, рифма өсөн көй генә түгел, эпик фекер, эпик идеяны үткәргән иң төп күрһәткестәр һәм улар ошо көйҙәрҙә тәбиғи, органик яңғырай, халыҡ ижады булмышына, ҡобайыр аһәңенә ҡаршы килмәй.

Эпостың сюжет, фекер үҙенсәлектәренә, образ системаһына ҡарата гипотетик бер нисә һүҙ.

1. Бөйөк ҡобайырҙың тере хәтерҙән, телдән килеш яҙып алыныуынан 105 йыл үтеүҙән һуң был "Урал батыр" ҡарһүҙе — иң күләмле, тулыраҡ һәм бөтөн йөкмәткеле.

2. Булған варианттар, өҙөктәр араһында "Урал батыр" ҡобайыры, был ҡарһүҙ — көй һәм текст берлегендә һәм йәнле телдә һаҡланыуы, башҡарылыуы менән уникаль дәлил һәм феномен!

3. Ҡарһүҙ — серле йөкмәткеле, боронғо дәүерҙәрҙе эпик стилдә бәйән иткән күләмле үҙаллы жанр. Башҡарыу рәүеше, ваҡыты һәм махсус урыны, тәғәйене бар. "Ҡара" — "боронғо, бик ҡарт", "оло кешеләрҙең һөйләгәне" тигәнде аңлата. Әммә һүҙ тылсымы кешелек ижадында беренсе урында булыуын иҫәпкә алып, һүҙ асылын аңлатыу өсөн йола контексына иғтибар кәрәк. Йола буйынса, миф, әкиәт, эпостарҙы йәй, яҙын һөйләмәгәндәр, сөнки әруахтар асыулана һәм Тәбиғәт көстәренә зыян килә, тип иҫәпләнгән. Был тыйыу йола, эпосы булған яҡут-саха, ҡалмыҡ, ҡырғыҙ, алтай, ҡаҙаҡ халыҡтарында киң билдәле. Күрәһең, эпос һөйләү процесы йола йөкмәткеле булған. Әлеге көндә лә "йәйен әкиәт һөйләмә — ҡыш оҙон була, ҡоролоҡ була" тигән тыйыу бар. Көн-ҡояш яҡтыһында ла әкиәт, ҡара һүҙ һөйләү тыйылған: һыйыр һөтһөҙ була, йылҡы тарала һ.б. Төптән уйлаһаң, ҡарһүҙ, әруахтар менән мөғәмәлә итеп, ваҡытлы "үлем" кисергән Тәбиғәткә ҡышын ярҙам итеү функцияһын үтәгән. Сөнки мәшһүр батырҙар, алпамышалар тураһында һөйләү ыңғай көс, ихтыяр һәм дәрт, көс арттырыу сараһы булыуы тәбиғи. Шулай итеп, ҡар(а)һүҙ — кәрәкмәгән, буш һүҙ һәм көйһөҙ халыҡ әҫәрҙәре лә түгел.

Ҡар(а)һүҙ термины — ҡара төҫкә (болот, сепрәк, ҡош һ.б.) йәки "ҡаты", "көслө" (һыуыҡ ҡыш, күңел) төшөнсәләре менән генә бәйле түгел, уның килеп сығышы, мифологик тамыры бик тәрән һәм донъя яралмыштағы ысынбарлыҡтарға тоташа. Архаик мифтарға бәйләп өйрәнгәндә, "Авеста"ла Хукарйа тигән алтын тауҙың иң бейек үре Харанти ("бейек Хара") тип аталған исемде иғтибарға алыу фарыз. Ошо тау тирәләй Ҡояш, Ай, планеталар, йондоҙҙар әйләнә. Ошонда уҡ изге ағас Хаома үҫә. Ардва йылғаһы Хара түбәһенән Ворукаша диңгеҙенә һыуын ҡоя[1]. Йәғни мифологик эпоста "Хара" символы донъя башланғысын, "бик борон", "башланыу үҙәге", "тыуыу урыны" йөкмәткеләрен бирә. Хара — Ҡара тау төҫөн түгел, ә "иң төп башланғыс, боронғо булмыш " мәғәнәһен асыҡлай, аңлата. Фекергә дәлил итеп бер нисә үрнәккә туҡтайыҡ.

Ҡобайырҙарҙағы “Түрә түгел, ҡарамын” һүҙбәйләнешендә “ҡара” һүҙе ябай кеше, халыҡ ҡатламы вәкилен билдәләүен аңлайбыҙ. Әммә боронғо төрки-монгол, ҡытай йолалары буйынса (б.э.т. 2317—2208) төп халыҡты “ҡара халыҡ” тип атағандар (Генон, 2002, с.156) һәм был ҡәүемдең йөҙөн, төҫөн, статусын түгел, ә бик боронғо, йәғни ҡараңғы башланмыштан, тарих төпкөлөнән үҫешеп килгәнен, аборигенлығын аңлата. Боронғо ҡытайҙарҙың Цинь династияһында артабан да (б.э.т. 3-сө б.) император үҙ халҡына “ҡара башлылар” тип исем бирә, боронғо египетлылар ҙа үҙ тыуған илдәрен “Ҡара ер” тип атаған (Кондыбай, 2011, с.192). Шулай итеп, “ҡара халыҡ” тигән һүҙ “борон-борондан башланмыш алған, ҡеүәтле халыҡ” тигәнде аңлата.

“Ҡарасай килмәй, яҙ булмай” әйтемендә ҡара ер сыҡмайынса яңы дәүер башланмай, тигән фекер ята. Боронғоноң әмере, рәте ҡушмай тороп, яңыға баҫып булмай.

“Ҡарасай батыр” тигән башҡорт әкиәтендә Күренмәҫ хандың (күренмәҫ, беленмәҫ, абстракт бик боронғо донъя символы) ҡыҙын алған егет[2] матур, төҙөк донъяны башлаусы мифик герой (демиург) булараҡ күҙаллана. Күренмәҫ хандың ҡыҙын алыу (Ҡарасай батырҙың әкиәттәге маҡсаты) — бик боронғо, үткән замандан кәрәкле белем, түл алып, яңы донъя төҙөүҙе аңлатҡан ҡыҙыҡлы символик фекер. Үҫеш мәлендә ул миф әкиәт рәүешен ала.

Ҡаңбаба һүҙендә “ҡаң-ҡара” иһә иң тәү ата-баба, әруах культына бәйле һәм үлеләр донъяһына күскән бабаларҙы күҙаллай. “Ҡаңг” боронғо, арғы төрки телендә “тау эсендәге мәмерйә” тигәнде аңлата һәм семантик яҡтан бер фекерҙе үткәрә. Артабан шул уҡ ваҡытта ҡаң, ҡара “баш белем, тәүсығанаҡ тәжрибә” тигән йөкмәткеһе менән киләсәкте лә бәйләүсе һүҙ. “Ҡанбабаларыбыҙ аманаты” тип һөйләгәндә беҙ ҡара, күренмәҫ донъяға күскән ата-олатайҙарҙың аҡылын ала, тота белеп, яңы тормошта ҡулланыуҙы аңларға тейеш. “Иң юғары мәғәнәһендә ҡара төҫ — башланғыс, күренмәгән, сағылмаған хәлдә аңлата”, — тип яҙа Р.Генон[3]. Ғөмүмән, ҡыҫҡаса әйткәндә, ҡаңлы, Ҡаратау, Ҡара ер, Ҡарахан һүҙҙәрен тәү урын, ваҡыт, арауыҡ, боронғолоҡ төшөнсәләренең берләштерелеүе юҫығында аңлау кәрәктер.

“Ҡарындағы бала белеп тыуа” әйтемендә аналыҡ “ҡара” һүҙенә шулай уҡ бәйле булыуы символик мәғәнәле. Ул “башланыш белем”, тыуыр заттың “урыны”, буласаҡ яңы хәҡиҡәт (кеше, донъя) төшөнсәләренә тоташа. Генетик хәтерҙең (күренмәҫ, ҡара — боронғо, үткән донъяның) киләсәк быуында үҙенән-үҙе йыйылған, тапшырылған тәжрибә, белек булып дауам итеүенә ишара был әйтем.

Дөйөмләштереп шуны әйтеү кәрәк: “Урал батыр” эпосы халыҡта һаман ҡараһүҙ тип әйтелеүендә башҡорт генотибына хас тәрән генетик хәтер, тарихи-мифологик белемдең оло дәлиле бар. Донъя яралыуынан алып, Уралда кешелектең яңы аң дәүеренәсә етлегеү эпохаһын бәйән иткән махсус тылсымлы оло һүҙ, ысул функцияһын үҙ эсенә ала, сағылдыра был термин. Ҡарһүҙ — халыҡ эпосы, заманалар сылбырын образлы бәйән иткән мифик сығышлы оло әҫәр, үҫеш дәүерендә, башҡарыу тарихында йола үҙенсәлекле, ҡағиҙәле, шулай уҡ дәрт-дарман көсәйтеү, батырлыҡ тәрбиәләү сараһы, донъя фәлсәфәһе менән таныштырыу маҡсаттарын үҙләштергән махсус сығанаҡлы әҫәр. Ҡара (һыуыҡ) ҡыш осоронда һәм ҡара төндә һөйләнелгән тылсымлы, йола йөкмәткеле һүҙ-миф ул.

Эпос термины — халыҡ-ара рәсми ғилем һүҙе. Ҡарһүҙ (миф, халыҡта — миҫ) — башҡорт халыҡ термины һәм тәрән мәғәнәүи үҙмилли сығанаҡлы, йөкмәткеле атама. Фәндә ҡулланыуға ла ҡайтырға тейеш. “Урал батыр” ҡобайыры — поэтик телдә ҡасандыр тирегә (ҡоба — боронғо тире, күн тигәнде аңлата) яҙылған Ил йыры, халыҡ көс-ҡеүәтен һаҡлаусы, тәбиғәт менән берләштереүсе ҡар(а)һүҙ ул.

Ҡешелек түгел, донъялыҡ, “баҒ”тың борондан тыуыуын, яңы ваҡыт килеүен символлаштырып, милли мифты шулай атай ҡараһүҙ. Ҡарайыҡ. Инглиз телендә born — “тыуыу, тыуған” тигәнде аңлата. Башҡорт телендә ауаздаш шул һүҙҙән “Урал батыр” башлана. “Борон” (born) — борон замаңға, йәғни донъя тыуған мәлде күҙаллап, бәйләп әйтелә лә инде оло ҡобайыр! Шуға эпостың “в стародавние времена” тип түгел, ә “тогда, когда рождались мир, время” тип тәржемә ителеүе мәғәнәүи яҡтан отошлораҡ булыр ине. “Урал батыр” эпосындағы “Борон-борон борондан, кеше-маҙар булмаған” тип әйтелгән юлдар ваҡыт, арауыҡ, күренмәле донъя тыуыуҙы, “морон төртөүҙе” әйткән ифрат тәрән символик һүҙҙәр улар.

Бөйөк башҡорт ҡотон һәм милли рухи көстө үҙенә туплаған “Урал батыр” эпосы халыҡ хәтерендә ҡараһүҙ тип һаҡланыуы бик тәрән белек һәм мәғәнәгә эйә. Ҡараһүҙ — тәүге, күренмәҫ, ҡараңғы ваҡыт, “боронғолар һүҙе”, “миҫ”, “иҫләү” (миф) тигән төшөнсәләрҙе ала, артабан йола йөкмәткеле (ҡараңғы мәлдә һәм ҡышҡы һалҡын — “ҡара” дәүерҙә һөйләнелә торған) махсус һүҙгә әүерелә. Архаик аңда традицион күренеш — һәр нәмәнең үҙ тылсымына яраҡлы парлылыҡ идеяһы ята бында. Мәҫәлән, йола үтәгәндә ҡаҙандың ҡара төбөн әйләндереп ҡуйыу ҡара болот саҡыра, һары ауырыуын бөтөрөү өсөн һары самауырға ҡарап ултырырға кәрәк, ҡыҙылсанан ҡыҙыл сепрәккә төрөнөргә һ.б. Һәр нимәне донъя, тәбиғәт гармонияһына яраҡлаштырып күнеккән башҡорт аңы — боронғо аң күрһәткестәре, белектәр. Башланыу, яралыу тигән боронғо мәғәнәләрҙе үҙләштереү “иртәк” һүҙенең дә (ҡатай башҡорттарында әле лә әйтелә) дауам итә. Тәү башланғыс мәл, ваҡыт башланғысы — “иртә” лексемаһына бәйле ул термин.

Ваҡыт үтеү менән “ҡара” һүҙе төҫ, “күңел торошо”, “ҡаты һыуыҡ”, “яман кеше”, “бит”, “иҫке” төшөнсәләренә генә бәйле әйтелә башлай. Матбуғатта һәм сәйәси телмәрҙәрҙә миф һүҙе “алдаҡ”, уйлап сығарылған фантазия, иллюзия синонимдары булып киткән кеүек, ҡараһүҙ ҙә “буш”, “иҫкелек ҡалдығы” һымаҡ аңланыла хәҙер. Әммә беҙҙең бурыс — хәҡиҡәт таныу, табыу һәм шул нигеҙҙә юғалып барған рухи донъябыҙҙы төҙөкләндереү. Теге йәки был халыҡтың үҙе тураһында, донъялыҡ тураһындағы хәҡиҡәте ул ҡарһүҙ-миф. Миф башҡортта “миҫ” һүҙенә бәйле (иҫ, хәтер, иҫләү), халыҡ хәтерендә әле лә бар.

Мифология үҙе — символдар системаһы, һүҙ унда — иң дәү ҡиммәт һәм тәү символ. Һәм беҙ тапҡан әлеге хазинала (шулай уҡ, ғөмүмән, эпостарҙа, йырҙарҙа, риүәйәттәрҙә) фәҡәт һүҙҙәр аша башҡорт мифын таныу, миф йомағын сисеү — үҙе бик ҙур, актуаль мәсьәлә.

Әсмә инәй һөйләгән “Урал батыр” ҡарһүҙендә иғтибарҙы бер ҡараштан йәлеп иткән ҡайһы бер деталдәргә генә туҡталабыҙ. Улар иһә төп текста юҡ. Ошо аныҡлыҡтар булыуы арҡаһында беҙ халыҡ мифологияһы буйынса яңы һыҙымталар эшләй алабыҙ.

Мөғжизәүи Аҡбуҙат һыны Әсмә инәй һөйләүендә уғата боронғо мифологик белекте һаҡлаған. Беҙгә билдәле “Урал батыр” эпосында Аҡбуҙатты һүрәтләгән юлдарҙа булмағандары бик ҡыҙыҡлы дәлил һаҡлай. Төп текста Аҡбуҙатты һүрәтләү — утыҙ юл (килеп төшөүен алһаҡ — ҡырҡ юл), ә Әсмә инәй һөйләгән ҡарһүҙҙә — ҡырҡ биш юл! Юлма-юл сағыштырып ҡарау эше оло текстологик тикшереү талап итә. Әммә Аҡбуҙат затының архаик йөкмәткеле булыуын яңынан аңлау өсөн ифрат мөһим булған ҡайһы бер яңы юлдарҙы ҡарау мотлаҡ.

Ҡыйғыр бөркөт ҡанатлы,
Аждаһа-йылан тамаҡлы,
Ҡуян күҙҙәй үткер күҙ,

Үткер ҡылыс тырнаҡлы,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы.
...............................
Ологайған ҡартты ла,
Менһә, йәп-йәш ир итер.
Бөтә енде дертләтер,
Донъя ғәмен уятыр...

Ҡанатлы ат Аҡбуҙаттың йыртҡыс, ат, илаһи ҡош, аждаһа, йылан сифаттарын үҙендә берләштереүе — үтә боронғо тарихи этаптарҙы барлау өсөн бик сағыу мифологик образ. Аҡбуҙат был осраҡта аждаһаны ла кәүҙәләндерә, уны ҡанатлы толпар менән бер сығанаҡлы итә. Америка тарихсыһы Э.Шеферҙың атҡа бәйле боронғо мифтарҙа "ат — һыу стихияһының серле донъяһында булған аждаһаға туған ул"[4], — тип яҙыуына иғтибар иткәндә, тағы ла тәрәнерәк тарихи белектәр асыла. "Ат — аждаһа — ҡош — йылан" мифологемаһында "һыу — күк — ер — кеше" бәйләнештәрен, донъя-тереклек үҫеш этаптарын бик ҡыҙыҡлы сағылдырған ҡатмарлы йомаҡты күрмәү мөмкин түгел. Биш сифатты бер үҙендә дөйөмләштергән мөғжизәүи зат иһә бер нисә мең быуат ваҡиғаларын бер үҙендә туплаған. Ҡешенең килеп сығышы, антропогенезына бәйле ул.

Әсмә инәй бер эпизодты һөйләгәндә ниңәлер күңелем тулып китте. "Аҡбуҙат Һөмәйрә янына килеп төшкәс, Һөмәйрә шунда Аҡбуҙаттың өлпә сәсенән генә алып, ялының осона тиклем һөйөп һыйпап ала ла, уның муйынына башын һала", — тип һөйләне Әсмә инәй. Ат затына шундайын һөйөү, оло ҡәҙер, ниндәйҙер серле хис, фекер һалынғайны бында. Сөнки һәр һөйләгәнендә лә ошо күренеш ҡабатланды. Ә билдәле текста иһә[5] "Һомай һыпырып башынан" тип кенә әйтелә. "Өлпә сәсенән ялының осона тиклем" тигән юлдарҙы Әсмә инәй иһә һәр һөйләгәнендә ҡул хәрәкәте менән яйлап ҡына һыпырыуҙы күрһәтеп һөйләне. Мөьминә инәй ҙә шулай күрһәткән икән (айырым һорағас, әйтте). Тимәк, был ҡылыҡта бер мөһим сер барлығы күренеп ята. Йоланы, унда ым-хәрәкәттәрҙең мәғәнәһен тикшереү мәлендә һүҙ һәм ритуал, һүҙ һәм хәрәкәт бәйләнештәренең һәр саҡ функциональ, мәғәнәле йөкмәткеле булыуын белеү шуны раҫланы. Символик хәрәкәттәр эсендә боронғо тотороҡло белем, миф ята. Мәсьәләне асыҡлау бер фекер асты. Был хәрәкәт аша, шулай итеп, "Урал батыр" ҡарһүҙендә кешенең аждаһаны буйһондороуы — боронғо тарихи этап кәүҙәләнә. Берҙән, антропогенез юҫыҡтан байҡағанда, "һыу аты — күк аты" образында кешелек маҡсаттары, яңы аңға ирешеү этабы сағыла. Аждаһаның (ҡырағай аттың) йәне уның ялында булыуына фольклорҙа бик күп сюжеттар бар: башҡорт әкиәт батырҙары серле аттарҙы, йәшерен тыуған толпарҙарҙы буйһондороу өсөн ялынан шаҡырып ала, йәиһә туҡмай, ҡан сыҡҡансы һуға, бөйөрөнә төртә, һыйпай һ.б. Ялынан тотолған (мифик ҡыҙ — сәсенән, ат — ялынан тотола) януар кешегә баш һала (ә ҡыҙ егеткә буйһона). Мәҫәлән, "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында һыу батшаһы ҡыҙын Заятүләк сәсенән шаҡарып тотоп алғас ҡына артабан үҙенеке итә ала. Тимәк, ял (сәс, ҡыл) — йән, рух, ҡот һаҡлаусы тылсымлы ағза. Аттың (аждаһа) мөғжизәүи тылсымы ялы менән бәйле булыуына был юлдарҙа бик кәрәкле "белешмә" ята. Туй йолаһында ҡыҙ оҙатылыр алдынан сәс үреү, ике толомдо бер итеү йолаһы ла күсеү, буйһоноу, икенсе ҡорға инеп, яңы талаптар буйынса йәшәргә тейешлекте аңлата. Аждаһаның, ҡырағай аттың йәне ялында булған кеүек[6], күк аты Аҡбуҙаттың да йәне ялында һаҡлана, мәгәр. Йәнә килеп, ир заты түгел, ә ҡатын кеше атты тәүҙәрәк буйһондороуына ишара бит Һөмәйрәнең Аҡбуҙатты саҡырып килтереүе һәм буйһондора алыуы! Архаик дәүерҙәге амазонкалар, һуғыш һәм ғәҙел еңеү

алиһәләренең тарихи үсештә ғәйәт ҙур роль уйнауы сағыла. Артабан ил һаҡлау өсөн көрәш ирҙәргә күсеүе, патриархатҡа йүнәлеш һынлана, буғай, эпизодта.

Урал (ир кеше) түгел, ә Һөмәйрәнең атты ҡулға эйәләштереүе патриархатҡа тиклем үк булған дәүерҙе сағылдыра һәм Күк тарафынан Урал ғәләйһиәссәләмгә фатиха төшөүе уҡыла.

Шулай итеп, ҡарһүҙҙә Һөмәйрәгә төшкән Аҡбуҙат — астраль донъя вәкиле — аждаһа үҙе була. Был мотив тарихи эволюцияла бик боронғо төрки мифологияһын, оло белектәрҙе сағылдыра.

"Олоғайған ҡартты ла,

Менһә, йәп-йәш ир итер", — тигән юлдарҙа иһә Кешенең килеп сығышы тарихында, антропогенезында аттың махсус роле булыуға ифрат асыҡ ишара һаҡланған. "Ҡара юрға", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Аҡбуҙат" эпостарында, шулай уҡ "Ҡыран батыр" һ.б. әкиәттәрҙә кеше һәм ат араһында ҡантуғанлыҡ мотивтары һалынғанлығы күренеп тора. Ат бөйөрөнә төртөүҙә йә иһә ҡамсылауҙа (әкиәттәрҙә бик тотороҡло йола) ғәҙәти булмаған затты буйһондороу ысулы йолалаштырылған. "Алатаев" әкиәтендә ала тай менән Алатаев атлы егеттең туғанлыҡ мотивы, мәҫәлән, ошондай мөнәсәбәттәрҙә асыҡ күрһәтелә[7].

Төрки халыҡтарындағы героик эпоста, саха-яҡут мифтары миҫалында, антропогенезда кеше аттан тыуыу мотивына[8] бик асыҡ миҫалдар бар.

Башҡорт фольклорында ла был белек бик ҙур урын алған һәм "үҙен менгән ҡартты йәп-йәш ир итер" Аҡбуҙат ана шул ат кешене тыуҙырыуына бәйле архаик мотивты бик аныҡ сағылдырған дәлил, беҙҙеңсә. Төп текста былдай фекер үткәрерлек асыҡ юлдар юҡ. Тимәк, "Урал батыр" ҡарһүҙендә бик боронғо ҡатлам эволюция этаптары, тереклек үҫеше, башҡорт антропогенезында ат роле буйынса белектәр һаҡланған. Ат — кешене яңынан тыуҙырыр Көс. Аҡбуҙат — артабан үлемһеҙ ғүмер, оло маҡсат, изге эш метафораһы.

Хызыр Ильяс халыҡ хәтерендә изге илаһи зат тип ҡабул ителә. Әммә дини мифологияла, дөйөм төрки риүәйәттәрендә Хызыр һәм Ильяс ике кеше булыуы билдәле. Әсмә инәй һөйләүендә иһә ул аныҡ әйтелә: "Хызыр — ер бәләһенән, Ильяс — һыу бәләһенән һаҡлаусы". Эпосҡа дини мотивтар инеп китеүе лә әҫәрҙең халыҡ хәтерендә оло дәүер йәшәүенә дәлил.

Урал тауы, башҡорт ере, кешеһе килеп сығыуға ҡараған антропологик мотивтарҙы "Урал батыр" ҡарһүҙендә яңы юҫыҡта аңлар өсөн ҡыҙыҡлы эпизодтар күп. Космогоник ҡараштар, игеҙәктәр культы, артыҡ ҡояш һ.б. мифологик ҡалыптарҙы, кодтарҙы, эпик феномендарҙы фәҡәт филологик, философик, археологик йомаҡтар тип ҡарауҙан тыш, һәр һүҙҙе тиерлек милли мифология билгеһе итеп тәрән комплекслы тикшереүҙәр алда тора. Шуға күрә лә ҡобайырҙарҙың бер һүҙенә лә ҡағылырға ярамаған тыйыу изге ул.

Йәнә килеп, "Урал батыр" — пәйғәмбәр тураһында оло белек, ә миф иһә эпос булып формалашҡан бик оҙайлы процесс. Донъя яралыуынан алып нисә мәҙәниәт, нисә тел, күпме мәғлүмәтте үҙләштереп, башҡорттоң ғына милли китабы булғаны үҙе бер тарихи ғәҙеллек. Тыуған төйәктең, ер-һыуҙың үҙбилдәләнешен (хатта миллилеген) "паспортлаштырыу" маҡсатында Кеше — Демиург принциптары эпоста поэтик камиллашыуы, ҡобайырҙа арғы төрки (иран, индо-иранға, шумерға тиклем дәүер) идеологияһының фәҡәт башҡорт телендә тәрәнерәк һаҡланыу йомағын асыу һ.б. — һәммәһен өйрәнеү перспективаһы ярылып ята. Системалы текстологик эш хәҙер тәрән мифологик, халыҡ-ара лингвистик, тарихи-этник, психологик, антропологик юҫыҡтарҙа башҡа мәҙәни йәнәшәлектәрҙе байҡап, башҡорт ҡарһүҙенең (мифтың) эпос булып формалашып ҡалыплашҡанын,

диалекттарға тиклемге боронғо тел дәүерен айырып алыу ҙа оло мәсьәлә. Ҡомдан алтынды йыуып алған кеүек.

Эпосты эпос иткән төп маҡсатлы идея, аҡыл төйөлгән үҙәк фекер була: Ерһыу барлыҡҡа килеү, уны һаҡлауҙа изге көрәш һәм халыҡтың төп идеологияһы, йәшәү ҡануниәте камиллашыуы, Ҡеше хаҡы, намыҫ һәм ғәҙеллек, үлем һәм йәшәү, тормош ҡиммәттәренең баһалы урыны бәйән ҡылына. Ошондай ҡаҙаныштарҙы туплаған текст һис ҡағылырға, тулыландырылырға мөмкин булмаған килеш аныҡ бер дәүерҙә үҫешеп туҡтай һәм милли үҙаң формалашыуына дәлил, Илгә изге китап була. Ошо рәүештә ул милләттең төп серен һаҡлаған ҡотло белек, үҙбулмышы менән иң камил ҡиммәт йөкмәткеһен күтәрә. Ошо сифаты уны милләт сиктәренән сығарып, дөйөм кешелек кимәлендәге рухи хазина итә ала. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уның ҡайһы бер өлөштәре хәтерҙән төшөп тә ҡала. Әммә милли хәтер үҙ ижадсыһына ғәжәп тоғро, заманалар тулҡындары шаулап үтеп, ваҡыты еткәс, ынйы бөртөгөн халыҡ алдына сығарып һала... Әсмә инәй Усманованың хәтер асышы шулай булды.

Һүҙ генә түгел, фекер, тауыш, өн, һөйләм төҙөлөшө, ҡылыҡ, хәрәкәт — барыһы ла ата-баба ижадында борондан тәрән йөкмәткеле сер, тылсымлы Белек. Бының шулай икәнен башҡорт белгән һәм шуға тоғро, риза булған халыҡ (кеше) иһә үҙ йырына ла, йомағына ла, эпосҡа ла үҙ йөрәк көсөн, ҡотон, һүҙен үреп, әммә мәғәнәһен, аһәңен боҙмай, аманатты быуаттар буйы тапшыра килгән бөйөк Ҡитап итеп. Әсмә инәй һөйләгән ҡарһүҙҙә лә үҙбелдек юҡ.

Яңы заман, дәүер кешеһе һүҙ тылсымы тигән феноменды тулыһынса аңлауҙан күптән ситләште. Бөйөк, аңлап бөтмәҫ, быуаттар буйы туҡылған белемде — символдарҙы, меңйәшәр аҡылды аңланым тип, халыҡтан ҙур булып, эпос һынлы эпос аманатына ҡарата алдашыу була алмай. Һис! Оло ҡеүәт йыйған, үҙ махсус энергетикаһы булған Һүҙгә әллә ниндәй кире мәғәнә һалыуың бар бит. Был инде XX—XXI быуаттағы профанизация күренеше — халыҡ йырын, көйөн, бейеүен бөгөнгө башҡарыусы нисек боҙа ала һәм... наказ алмай. Әммә Әсмә инәй ихласлығына был ҡағылмай.

М.Буранғоловтың “Урал батыр”ға индергән һүҙ-һамаҡтары төп тексҡа йәбештерелгәне күренеп тора. Ҡайһы берҙәре уңышлы, ә ҡайһылары ана шул ҡарһүҙ, ҡобайыр тәбиғәтенән сығып китә. Сөнки ул һүҙҙәр, өҫтәлмәләр XX быуат ижадсыһының ижады булып ҡына түгел, ә авторҙың боронғо халыҡ әҫәрен интерпретациялауы булып килеп инә. Ҡемдер, йәки кемдеңдер, ниндәйҙер мәҙәниәттең камил эпосы юҡ икән — ул эксперимент эшләй, ҡоршап, ямап “яһай” һәм кемделер ышандырырға тырыша. Эпослы халыҡ — бауыры бөтөн, борондан ҡөҙрәтле Йәшәү идеологияһы булған, шуға ла заман яманына бирешмәҫ, үҙ генотибын, асылын тота килеп үҙгәртеп бармаясаҡ ныҡ халыҡ ул! Шуға ла эпостарҙы, эпос башҡарыусыларҙы юҡ итергә тырышҡандар...

Уралда йәшәгән баш халыҡтың ҡаҙанышы, ижади асыштары үҙ ҡағиҙәләре буйынса тыуа, йәшәй һәм уның аманаты изге. Көнбайыш халыҡтары өсөн ғүмер, тормош ҡотон һаҡлаған, изгеләштерелгән граль кеүек, башҡорт ҡарһүҙе лә, “Урал батыр” ҡобайырҙары ла изге.

Әсмә инәй һөйләгән ҡарһүҙҙә әкиәт мотивтары килеп кергән хәлдә лә, сәсәниәнең һөйләү ысулы әкиәти булһа — ул тарих еткереү, ә башҡорт телендә ул үҙе үк миф тигән аҡыл ярылып ята. Ҡобайыр көйләп тә, сәсмәләп тә, ҡыланышлап та бәйән ителде. Ошо тарихи ижади мәл үҙе үк феноменаль булды.

Шуға ла эпик телмәр, һөйләү тәбиғәтенә ҡарата ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәргә урын бар. Ҡайһы һөйләм телмәр ағышына йәтеш, телмәрҙе гармония тулы бер мәҙәни

акт, күренеш итә? Байҡайыҡ әле. “Ҡаф тауына типһәм мин”[9] һәйбәтме, әллә Әсмә инәй һөйләгән “Ҡаф тауына типте ниһәм” ҡарһүҙебеҙме? “Урайы ҡуш, яңағы ас”мы[10], әллә “Урайы ҡуш яңағас”мы? “Муйындары бер ҡолас”мы[11], әллә “Һылыу муйыны бер ҡолас”мы? “Күктә торҙоң йондоҙҙай”мы[12], әллә “Күктә торҙоң буҙ булып”мы? Бындай сағыштырыуҙарҙа күп фекер бар. Тел хикмәтен тойған кешегә бында әҙәби тел һәм халыҡ теле, ижады күренеп ята.Тәбиғи телмәр ағымына ятып ҡына тора ҡарһүҙ аһәңе һәм эпос серен асыуҙа тағы бер алым булмаҡсы.

“Урал батыр” эпосының мифик телен, телмәр культураһын, төп үҙәген төрлө авторҙар “эшкәртеп” өҫтәгән ҡабыҡтарҙан аралайһы, барлайһы бар. Сөнки миф эпосҡа әүерелгәндә сифатын үҙгәртә, әммә хаҡты һүрәтләмәй, эпос аңлатмай, ә нисек бар — ваҡиғаларҙы күп мәғәнәле символдар аша теҙә. Бына ошо үҙәкте беҙгә әле һөҙөп алаһы бар. Ниндәй дәүерҙә эпостан ҡайһы урыны “төшөп” ҡалған, ни өсөн — былары ла ғилми тема.

“Урал батыр” ҡарһүҙендә Уралдың Йәншишмә һыуын мөгөҙгә һалып һибеүе, эсергә тыйылған ҡандың хайуан башһөйәгендә һаҡланыуы, тере һөлдәнең — үлә алмай йөрөгән батырҙың (“Урал батыр” эпосында үлә алмай йөрөгән ҡарт) булмышы һ.б. бик күп мотивтар — артабан асыҡлайһы мәсьәлә. Ҡарһүҙҙе тамамлап, ослап ҡуйған “Уралып ятҡан Уралда” ҡобайыры үҙе бер фәһемгә эйә. Эпик ваҡиға, арауыҡ, урын, донъя барлығын, халыҡ йәшәүен, Ҡеше булыу вазифаһын реалләштергән берҙән бер мөмкинлек — Яҡшылыҡ тураһында бәйнә-бәйнә һөйләгәндән һуң фәҡәт Уралды маҡтап, ҡобайыр әйтеп ҡуйыу — башҡорт фольклор-мәҙәни традицияһының тәбиғи һынланышы ул. ЕР-ҺЫУ культының халыҡ аңындағы көсөн алға сығара, Ил данлау батырҙан башлана тигән аҡылды раҫлай Уралды маҡтау. “Бар!” һүҙенең күп ҡабатланыуы ошо махсус функцияны күтәрә:

Уралып ятҡан Уралда
Бейек ҡая тауҙар бар,
Ҡуйы ҡара урман бар,
Айыу, бүре, төлкө бар,
Бар! Бар! Бар!

Йәғни эпик телмәрҙе — ҡарһүҙҙе тамам итеүсе булып, мәҙәни текстың ғына түгел, ә халыҡ милли идеяһының бөтөнлөгөн иғлан итә был ҡобайыр. Сюжет буйынса ул үҙенсәлекле эпилог функцияһын үтәй һәм ифрат йәтеш яңғырай, тыңлаусыға ғәләмәт рухи күтәренкелек бирә, “Урал батыр” эпосының драматик интонацияһын, батыр үлеүе сәбәпле трагедия мотивтарын һыуытып, көслө тормошсан пафос, йән, дәрт осошо ҡеүәтен алға сығара. Йәшәү пафосын, тыуған илде һөйөү һәм Яҡшылыҡ эшләү идеяһын ижади раҫлап, лирик планда түгел, марш тибында, оран яңғырашлығында ослап ҡуя был ҡобайыр. Һәм ул өлөш һуңғараҡ дәүерҙәге сәсәндәр тарафынан ижад ителеп, өҫтәлеп ҡуйылған осраҡта ла, ҡарһүҙ аһәңен, стилен, логикаһын боҙмай.

Эпостың милли ерлеген, кемдең ҡаҙанышы икәнен күрһәтеүсе төп шарт — уның оҙайлы ваҡытта ижадсы халыҡта телдән телгә һөйләнелеүе. Татар халҡында “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосы фәҡәт ҡулъяҙма формаһында ғына көн күргән “Түләк” китабы тип танылa[13]. Мәгәр “Заятүләк” ҡобайыры әлегәсә телдән телгә тик башҡортта ғына башҡарыла килә һәм ошоноң менән күп һорауға яуап бирә.

“Урал батыр” ҡарһүҙенең, халыҡсан башҡарылыу аманаты булып, XXI быуатта ла һөйләү мәҙәниәтендә һаман йәшәүе иһә башҡорт милләтенең тарихи булдыҡлылығына, уның теле, рухы камил ныҡлыҡта йәшәүенә оло бер дәлил ул! Был феномен башҡортто лайыҡлылар араһында лайыҡлы өммәт итеп таныта.

Был ҡомартҡы, төп текст менән сағыштырғанда, бик күп боронғолоҡ һәм мифик йомаҡтарҙы үҙләштергән ҡиммәтле мотивтары менән дә ҡыҙыҡлы. Образдарҙың

бирелешен генә байҡағанда ла, кешелек мираҫындағы эпик ҡомартҡылар рәтендә унда архаик, дөйөм донъя мифтарына хас һәм хатта тәрәнерәк белем һеңгәне сағыла. Донъя, аҡыллы кеше барлыҡҡа килеүҙән алып, камил дәүләт менән идара итеү ысулдары, ғаләм тураһында белек, кешелеклелек идеологияһы, кеше йәмғиәтенең төп принциптарын иғлан итеүгә тиклем һалынған унда.

Әсмә инәй һөйләгәнендә Уралдың тик өс улы булыуы, Уралдың ҡартайып үлеүе; улдары ергә ҡылыс ҡаҙап һыу сығарыуы; януар ҡаны баш һөйәгендә һаҡланыуы; Уралдың Йәншишмә һыуын мөгөҙгә һалып һибеүе (мөгөҙ — донъя мифында бәрәкәт, байлыҡ символы) — һәммәһе күп мифик белем, мәғлүмәт, оло белек йомған.

Төп текстағы Йәншишмә һыуын эскән, үлә алмай йөрөгән ҡарт бабай бар. Уның урынына беҙҙең текста — "Үлә алмай ҡаңғырып, тиңкереп, һәлберәп йөрөгән һөлдә. Йыйһаң, ҡаны ҡалаҡҡа тулмаҫ, һемереп алһаң, йотоп булмаҫ". Уралдың өс көн, өс төн йоҡлауы ла тәрән мәғәнәле: батырҙың яңы статусҡа инер алдынан үткән традицион мифик яңырыу йолаһына бәйле ул.

Урал менән Шүлгәнгә осраған Хызыр Ильяс дини мотивтар инеүен сағылдыра. Ә бына "Ташты өс бармағына ултыртып, алға ҡарап артына ташлау" (төп текста юҡ) шулай уҡ донъя яралмышына бәйле мифологик белек йомған. Насар, үлемесле күренеш, ваҡиға ҡабатланмаһын өсөн, "теге" донъяға ҡорбан биреү алымы ул — алға ҡарап артҡа әйбер ташлау.

Ул йола ғәжәйеп тотороҡлоҡта башҡорт Хәтерендә һаҡлана. 2004 йылдың йәйендә Бөрйән районы Һарғая ауылында Бөрйән ҡурсаулығы мөдире Вәсилә Янбаева ҡарттарҙан бер риүәйәт яҙып алған. Башһырт тауында йәшәгән башҡорттар көнсығыштан килгән оло дошман яуы менән аяуһыҙ көрәшә. Бер ҡаты яуҙан һуң бик күп ҡорбандар була, әммә башҡорттар еңеүгә өлгәшә. Ошо ваҡыт бер дошмандың башын киҫеп, доға ҡылып, алға ҡараған көйө, артҡа шул башты ташлайҙар. "Башҡа һуғыш булмаһын, дошман ҡабат килмәһен!" — тип. Тарихи мотивтары буйынса был һун яуы булыуы мөмкин. "Урал батыр"ҙа таш ташлау — дошманға ҡаршы көслө тылсымлы сара, шулай уҡ донъяны төҙөкләндереү өсөн ныҡлы, таянысլы мифик ым-ишара (өс бармаҡ) белеген һаҡлай, күрәһең. Таш ташлау артабан йыйындарҙа көс һынашыу ысулы булып формалаша.

Төп текста булмаған мотивтар эпосты асаһы йомаҡтарҙың бик күплеген һөйләй. Ерҙә һыу етмәй башлағас, Уралдың уландары — Һаҡмар, Иҙел, Яйыҡ ҡылыс менән сабып һыу сығара. Ә был яңы быуын, яңы фекер, яңы аң метафораһы ла. "Ерҙә һыу бөткәс", тереклеккә батырҙарҙың һыу асыуы тәбиғәт катаклизмдарының ҡабатланыуын һөйләй. Тимәк, XXI быуатта Кешелеккә янаған һыуһыҙлыҡ бәләһе лә ҡасандыр булған! Бик күп мифик реалиялар, Ваҡыт, Арауыҡ, Урын, Йыһан белеген ҡарһүҙҙә туплаған халыҡ хазинаһы донъя эпикаһында сағыу, юғары урынын алыр.

Мөхәмәтша Буранғолов бөйөк хазинаны тапшырған өсөн Ғәбит сәсәнгә ат бүләк иткән! Әсмә инәйебеҙгә ҡиммәтле мул күлдәклек тауар, оло ебәк яулыҡ бүләк иттем. Хоҙай халҡым Хәтерен, Рухын шат ҡылһын!

Эпостың тере хәтерҙә йәшәүенә ышанмаған тар фекерлеләр үҙ тыҡрығында, әйҙә, йөрөй бирһен (ә бит Ә.Усманованың һөйләүен телевидениела тулыһынса күрһәттеләр, тексы китапта баҫылды, инәй үҙе иҫән-һау). Беҙ иһә был тарихи табыш менән киңлеккә, Оло юлға, Яҡшылыҡҡа сығабыҙ!

Бер нәмә шарт. Оло иман, оло йөрәк һәм юғары граждандлыҡ, патриотлыҡ эйәһе булған Әсмә инәйҙең намыҫы ил алдында, әруахтар алдында таҙа һәм пак! Ул — халыҡ генийы һәм исеме тарих ташына алтын менән яҙылыр. Был Аллаһы

бойороғонан төшкән Хәҡиҡәт, Бүләк. Уны табыуым — тарихи эҙмә-эҙлелектең тәбиғи осланышы ғына. Ышанмаусылыҡ белдергәндәр, башҡорт булып формалашып бөтмәгәндәр өсөн ҡәҙерле Әсмә инәйебеҙ ғәйепле түгел! Уға (миңә лә) яла яғыусылар Урал ғәләйһиәссәләмдең рухына ҡаршы булып, үҙ хаҡтарын бик түбән төшөрөп ҡуйҙылар.

Башҡорт юлына, киләсәгенә, тел мөмкинлектәренә маяҡ, рухи шишмәләрҙең күҙҙәре асылырлыҡ хаят булды был күренеш. Донъялыҡта йәшәү өсөн Яҡшылыҡҡа буйһоноу — төп шарт икәнен башҡорт онотмаһын, шуның менән Ҡот ҡайтарһын тип, аныҡ әйтә бит Хәтер.

Әсмә инәй хәтеренән тапшырылған аманат тулыһынса уҡыусылар, уҡытыусылар тарафынан өйрәнелергә, "Урал батыр" көйләп әйтелергә тейеш хәҙер. Аманатҡа тоғролоҡ шулай була ул.

## Урал батыр тураһында ҡарһүҙ

"Борон-борон заманда, башҡа бер кеше лә булмаған ерҙә әбей менән бер бабай йәшәгән, ти. Улар ҡашығаяҡ тотмағандар, ут яҡмағандар, икәүләп һунарға йөрөгәндәр. Былар бик ауыр көн иткәндәр. Ярлы булғандар. Үлемдән ҡасып, башҡалар үлеп бөткәс, кеше йәшәмәгән ерҙә йәшәй башлағандар. Һунарҙан алып ҡайтҡан йәнлектәрҙе, ҡырҙан тотоп алып ҡайтҡан балыҡтарҙы шул гөйө ашағандар, ҡанын эскәндәр. Уларҙың бара торғас ике улы булған, кесе улының исеме Урал булған. Был ике бала икеһе ике төрлө холоҡло булған. Өлкәне — көнсөл, яуыз, кесеһе — аҡыллы, намыҫлы. Иң көслө гел һәйбәт була бит ул. Урал баштан уҡ һәйбәт була. Хәҙер улар һунарға киткәндә, ике улы бәләкәй, өйҙә ҡалдырып китә: "Шунда ҡан бар, шул ҡанды эсмәгеҙ!" — тигән атаһы, хәҙер инде мыны, был ҡанды эсмәҫкә ҡушҡан.

Уралды баштан уҡ маҡтаны өләсәйем. Әкиәттә бит батыр алда насар була. Унан батыр була, аҡыллы була. Үҙҙәре генә тапҡан, әгәр Урал ағайы менән үҙе генә йәнлек табып алып ҡайтҡан — шуның ғына ҡанын эсергә тейеш бу(л)ғандар. Ата-әсәһенең тотҡан йәнлегенең ҡанын икенсе кеше эсмәгән. Бына шулай ҡалған әйтем башҡортта: "Атам тапҡан йәл түгел, үҙем тапҡан мал түгел!" — тип, бына шунан ҡалған, тип һөйләп китә инде өләсәй ҡыҫтырып. Һөйләй ҙә, "мына шундай һүҙ ҡалған" тип, ҡыҫтырып ебәрә торғайны һөйләгәненә. Шунан Уралдың ағайы тыңлауһыҙ булған, ҡанды эскән, шуға гүрә ул ҡанһыҙ булып үҫкән. Ҡанһыҙ инде, кешене лә йәлләмәй, шундай насар ғәҙәтле кешене ҡанһыҙ кеше тип әйтәләр бит беҙҙең башҡорттар.

Бер ваҡыт Урал уйға ҡалған. Ботарлап йәнлектәрҙе ашап ултырғанда: "Атай, бына ошо йәнлектәр бөтәһе лә тере булған. Улар ҡайҙалыр ҡасҡандыр, йәшенгәндер, һеҙ уларҙы тапҡанһыҙ, тотҡанһығыҙ, тотоп алғанһығыҙ, беҙҙе лә шулай итеп, беҙҙе берәй йән эйәһе тотоп алмаҫмы, шуларҙың көнөнә ҡалдырмаҫмы", — тигән. Шунан һуң атаһы әйткән ти: "Донъяла Үлем тигән нимә бар. Ул күҙгә күренмәй. Үлем тигән яуыз күҙгә күренмәй", — тигән. Атаһы әйтә: "Бөтә тереклеккә лә килә, тере йән ҡасан булһа ла үлә. Бер кем дә тотоп ала алмай. Шулай булғас, тота алмағас, еңә лә алмай. Үлемдең ҡайҙа икәнен берәү ҙә белмәй", — ти.

"Үлем тигән яуыз ул,
Ҡайҙа йәшәй икән ул?" — ти Урал.

Шунан Урал әйткән: "Атай, мин шул юлға сығайым, Үлемде табайым, башын өҙә сабайым, һиңә алып ҡайтып күрһәтәйем!" — тигәс, атаһы: "Улым, ул күҙгә күренмәй!" — тигән. Шунан атаһы, һаман быныӊ менән ныҡышҡас, балаларына

әйтә: “Бик алыҫта, берәү ҙә белмәгән ерҙә әйтәләр, йәншишмәнең һыуы бар, шул йәншишмәнең һыуын эсһәң, кеше мәңге тере ҡала, үлем уға килмәй, тигән һүҙ бар”, — тигәс, Уралға был һүҙ тынғы бирмәй. Урал атаһына былай ти:

“Беҙ донъя гиҙеп киләйек,
Үлемде эҙләп табайыҡ,
Ул яуыҙдың башын өҙөп,
Һиңә алып киләйек!”

Шулай, йәншишмәне эҙләргә атаһынан рөхсәт һорап, эҙләп сығып китә. Яңғыҙ сығармай, ағаһы менән икәүһен атаһы сығарып ебәрә.

Былар юлға сығып китәләр. Эй китәләр, ти, ай китәләр, ти, йыл китәләр. Бара-бара, бик оҙаҡ барғандан һуң бер юл сатлығына барып сыҡҡандар. Унда ап-аҡ һаҡаллы бер бабай тора, ти. Аҡ кейемдә, үҙе ап-аҡ инде, күҙгә, ҡояшҡа сағылып матур ғына, һөйкөмлө генә, яғымлы бер бабай тора. Хәл-әхүәл һорашҡас, Урал был бабайға үҙенең хәлен, ниндәй маҡсат менән юлға сыҡҡанын һөйләп биргән. Шунан ул бабай әйткән. Ә был бабай Хызыр Ильяс булған. Хызыр ул кешене һыуҙан бәлә килгәндә һаҡлай. Ильяс ул кешене ҡоронан, ҡоро ерҙән бәлә килгәндә һаҡлай. Кешегә шундай ярҙамсыл зат икәнен әйтәм инде Хызыр Ильястың.

Хәҙер Хызыр Ильяс быларға әйтә: “Бына һулға (г)иткән бер Юл бар, уңға киткән тағы бер Юл. Уңға китһәң — туңырһың. Һулда — һәр ваҡытта тыныслыҡ, тоғролоҡ хөкөм һөргән батша бар”, — тигән. Сәмерҡош батшаһының иле бар. Сәмерҡош ул, әгәр ҙә дошмандан һаҡланырға булһа, сәмреҡоштоң тунын кейә, кәрәкһә, инде кеше затына инә. Шул ҡоштар батшаһы ти инде. Ә уңға китһәң, юл буйы, унда кешеләр ашаусы... (*сәсән уйлай.* — ***Р.С.***) ашаусы батшаның иле бар. Кешеләрҙең һөйәгенән яһалған бейек-бейек тауҙар бар, тип әйтә. Хәҙер, ике үҫмер егет, әле егет ҡорона етмәгәндәр, үҫмерҙәр, егет булып киләләр бит әле, кем ҡайҙа китергә бәхәсләшәләр. Шунан шыбаға осташып, баяғы бабай кәңәш бирә. Шыбаға осташығыҙ, кемегеҙгә ниндәй ырыҫ сығыр, тип. Уралға уңға китергә, ағайына һулға китергә өлөш тейә. Ләкин нығышмалы ҡанһыҙ ағайы:

“Юҡ, мин уңдан барайым,
Мин бит һинең ағайың!” — тигән.

Урал ағайына юл биргән. Ағайы киткән уңға, Урал киткән һулға. Уралдың ағайы китеп бара. Тирә-яҡта теге дейеүҙәрҙең, аждаһаларҙың шундай ярҙамсыл, боҙоҡ заттар, иблестәр, шайтандар Уралдың ағайының артынан эйәреп киләләр ҙә: “Бына һин барған ерҙә Сәмерҡош батшаның ике ҡыҙы бар. Береһе — Һөмәйрә, береһе — Айһылыу. Һин шуларҙың береһен нисек тә әүрәтеп, тәүҙә кәләш итеп һине алам, тип, әүрәт, шунан һуң беҙгә биререһең!” — тип, боҙоҡлоҡҡа өйрәтәләр. Уралдың ағайы шулай тип барып сыға Сәмерҡош батшалығы иленә. Иң алда ул Һөмәйрәне осрата, Һөмәйрәне шунда уҡ ярата. “Юҡ, мин уны дейеүҙәргә бирмәйем, мин быны үҙемә кәләш итеп алырмын!” — тип, икенсе ҡыҙ Айһылыуҙы күрә лә, шунан Айһылыуға: “Мин һине кәләш итеп алам”, — тип алдап-алдаштырып, хәҙер уны дейеүҙәргә йәшендермәк була.

Һөмәйрә тиҙ генә белеп ҡала ла, һеңлеһенә ҡош туны кейҙереп, ваҡытлыса Айға алыҫҡа ебәреп тора. “Берәү ҙә белмәгән, хатта мин дә белмәгән ергә бар, дейеүҙәр һине эҙләп тапмаһын”, — тип. Ә Уралдың ағайының шундай боҙоҡ уйҙа йөрөгәнен белеп, Һөмәйрә уны зинданға бикләтеп ҡуя.

Шунан хәҙер Урал. Урал инде кешеләр ашаған батшалыҡтың иленә барып сыға. Иң алда уның ҡыҙы менән осраша, уның ҡыҙы шул хәтле һылыу була: бер бите ҡояштай янып тора, бер бите айҙай янып тора, ирендәре бешкән сейәләй ҡыҙарып тора. Хәҙер ҡыҙ шунда уҡ Уралды ярата һәм уға кейәүгә сығырға уйлай,

нисек тә бу(л)һа! Башҡа егет килгән ваҡытта: “Ҡире китегеҙ!” — тип тәҡдим яһар ине, ә Уралға кире китергә тәҡдим яһамай. Уралға әйтә: “Егет, хәҙер атайым килгәнгә тиклем, мин һине йәшереп торайым. Атайым менән осраштырмай. Атайымдан һинең ғүмереңде алып ҡалам”, — тип һорайым, тигән. Урал уға риза булмаған, кеше ашаусы батша менән көрәшкә сыҡҡан һәм бик ныҡ ҡыйынлыҡ менән уны еңгән. Еңгән. Ҡеше ашарға (*ашалырға.* — ***Р.С.***) тип бикләп ҡуйған һарайҙарҙы асып, кешеләрҙе иреклеккә сығарған, ундағы кешеләр иректә ҡалған. Хәҙер инде улар менән хушлашып, Урал сығып китергә булғанда, өлкән аҡһаҡалдар уға кәңәш бирәләр: “Егет, батша ҡыҙы һине һөйҙө бит. Шул һөйөүен белдереп, атаһына ҡаршы барҙы бит. Һин ҡыҙҙы мәхрүм итмә, ҡыҙға өйлән”, — тип әйтәләр. Урал бик ныҡ уйлана. Унан ҡарттарҙың һүҙен тыңлап, ул ҡыҙға өйләнә. “Яңынан әйләнеп ҡайтҡан саҡта мин һине алып китермен!” — тип, һүҙ биреп, Урал сығып китә...

Хәҙер йыландар батшаһы иленә барып сыға, йыландар иленә, иләүенә барып сыға. Унда йыландар бер батырҙы ашаһа — бер башлы, ике батырҙы ашаһа — ике башлы, ун ике батырҙы ашаған йылан ун ике башлы булып киткән. Шуға күрә хәҙер... (*уйлай.* — ***Р.С.***) Урал шикелле килгән батырҙар бында күп була. Батырҙарҙы йыландар ашап торғас, береһе лә иҫән-һау әйләнеп ҡайта алмаған. Ә-ә, китеп барғанда бит әле. Ҡитеп барғанда шул йылан, иң ҙур йыландар батшаһының улы: “Мин башҡаларҙан айырылып торорға тейешмен, кешене йотмайым әле”, — тип боланды йота. Боландың мөгөҙө минең башымда матур булып күренеп торһон, тип. Боландың... Ҡешеләрҙең һөйәге шикелле боландың мөгөҙө ыуала тип уйлай ул. Ыуалмай, ныҡ була мөгөҙ. Шуны йота алмай, инде үлергә тип кенә торған ваҡытта Урал тап була. Боланды ейгән әйтә: “Егет, мине ҡотҡар һин. Ни теләһәң, һиңә мин ярҙам итәм!” — ти.

Теләһәң, атайыма ҡаршы барырға ла һиңә мин ризамын, тик үҙемде һин тере ҡалдырырһың, тигән шарт менән әйткәс, Урал уны ҡотҡара, Урал. Бына шул замандан тормош тәжрибәһенән дә белгәндәрҙер, болан мөгөҙөн бик изге мөгөҙ итеп беҙҙең халыҡ һаҡлай.

Бына беҙ шул Сик(кә) тигән ауылға күсеп барғанда өр-яңы өй ине. Ағайы ҡустыһына тип өй эшләгән. Ул армияға тип киткән ине. Шул яңы өйҙөң ишегенең башында болан мөгөҙө тора. Шунан ағайымдың атайыма һөйләгәнен ишетеп торам: “Бында теләһә ниндәй эштә йөрөгән баш кейемдәре элмәгеҙ. Үҙеңдең ҡунаҡҡа бара торған ғына кейемде элегеҙ”, — ти. Ә ҡайһы урындарҙа мин күргәнем бар, түргә лә элеп ҡуялар. Түргә элһәң, унда сигеүле таҫтамалдар, сөлгөләр элеп ҡуялар инде. Ҡилен бүләге, йәки ҡунаҡҡа барғанда ҡоҙалар бер-береһенә бүләк бирешәләр. Шуларҙы элеп, ҡиммәтле сөлгөләр, ҡиммәтле түбәтәйҙәр элеп ҡуялар. Болан мөгөҙө изге әйбер тип, һаҡлай торған тип, беҙҙең башҡортта шундай ғәҙәт булып ҡалған. Бына шул “Урал батыр” эпосынан ҡалғандыр ул болан мөгөҙөнөң емерелмәй икәнлеге. Бик оҙаҡ мөгөҙҙөң һаҡлана икәнен беҙҙең халыҡ белгән.

Шунан һуң хәҙер. Был йыландар батшаһының улы, атайыма хәҙер барайыҡ, ти. Мин нисек тә булһа атайымдың серле таяғы бар, шул таяҡты һиңә алып бирергә ярҙам итермен, ти теге болан ейгән кеше. Һин серле таяҡ менән үҙеңә ҡаршы килгән дошмандарҙы, кемде генә булһа ла емерерһең, тик һин миңә теймәҫһең, ти. Хәҙер атайыма барып, атай, һин теймә, мине шулай үлемдән ҡотҡарҙы, тип әйтәм. Улар боландың мөгөҙөн тотоп китереп күрһәтәләр. Шулайтып, мин ҡарлығып ята инем үлергә шулай, ти. Шунан Урал батырға кешенең атаһы теге теймәй. Бик ныҡ ҡыйынлыҡ менән, ниндәй ҡыйынлыҡ бу(л)ғандыр инде. Уралға ошо йыландар батшаһының серле таяғы эләгә. Ул таяҡ утта ла янмай, һыуҙа ла батмай. Әгәр ҙә менеп алһаң, кеше күҙенә күренмәйһең. Шул таяҡты алып, йыландар батшаһын

тар-мар итеп (улына теймәй инде уның) былар китергә булалар икәүһе бергә. Хәҙер китергә булғанда, шундай батырҙан беҙҙә тоҡом ҡалдырырға кәрәк тип, һылыу ҡыҙҙы үҙенә тимләйҙәр. Уралдың үҙенә лә әйтәләр. Бына был тимләү йолаһы беҙҙең башҡорттан ҡалған. Йәштәр хәҙер һанламайҙар ул йоланы. Шуға тимләп өйләнеүҙе мин хуплайым. Ана шул электән килгән ул "батырҙан батыр тыуар". Һин бит бер үҙең генә батыр булып йөрөмә, батырҙар күбәйһен, һин беҙҙең ҡыҙға өйлән тип, үҙенә бер аҡыллы ҡыҙға тимләйҙәр. Урал өйләнергә мәжбүр була. Ҡайтҡанда һине килеп алырмын тип, сығып китә. Хәҙер был йылан батшаһының улы үҙ юлында айырылып китә.

Ҡоштар батшаһының, Сәмерҡош батшаһының иленә килә Урал. Иң беренсе Һөмәйрәне осрата. Һөмәйрә менән хәл-әхүәл һораша. Дейеүҙәрҙе әле еңеп бөтмәй Урал. Һөмәйрә иленә килеп сыға. Кешеләрҙе ашаған боҙоҡ ерҙе, батшалыҡты, шунан йылан башлы кешеләрҙе, кеше ашаған илде үтә. Һөмәйрә иленә килеп етә. Һөмәйрә бер ҡарауҙа батыр икәнен таный:

"Ҡайҙан килеп сыҡтың, егетем,
Бармы һинең ефетең", — ти.

Урал әйтә:

"Бик алыҫтан килгәнмен,
Атай һүҙен тотҡанмын,
Тыуған илде ҡалдырып,
Кеше ашаған
Батша илен үткәнмен,
Йыландар илен үткәнмен,
Ҡайҙа ғына барһам да,
Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә
Ғәҙеллекте күрмәнем,
Яҡшылыҡты белмәнем,
Көслө көсһөҙҙө еңә,
Теләгәнсә баш әйә,
Донъяла үҙе беленмәй,
Һис күҙгә күренмәй,
Үлем тигән яуыз бар.
Шул яуыздың башын өҙөп,
Атайыма күрһәтергә —
Минең шундай уйым бар, — ти. —
Һылыу, һиңә һөйләйем.
Бик бәләкәй саҡта
Йәншишмә барын ишеткәйнем,
Шул шишмәне табайым.
Донъялағы мәңге тереклеккә
Бирәйем, мәңге йәшәрлек итәйем,
Тигән уйҙа юлға сыҡҡайным.
(Мин) Үлем тигән яуызды,
Уны эҙләп табайым,
Башын өҙә сабайым,
Һәм атайыма алып ҡайтып,
Мин уны күрһәтәйем".

Әгәр Үлемде күрә алмаһа (*кеше үлә алмай интекһә. — **Р.С.***), йәншишмәнең һыуын эскән, тиҙәр. Йәншишмәнең һыуы бар, шул йәншишмәнең һыуын эҙләп алып, бөтә тереклеккә мәңгелек ғүмер бирергә уйым бар, тип әйтә. Шунан хәҙер

Һөмәйрә шундай насар, ҡотһоҙ илдәрҙән урап ҡайтып, уның батыр икәненә ышанып, Уралдың һылыулығына һоҡланып, шунда уҡ ғашиҡ була. Һәм Һөмәйрә әйтә:

“Әй, егетем, егетем,
Ҡеше ашаусы батшалар
Илен үҙең үткәнһең,
Ҡеше ашаусы йыландар
Илен үҙең үткәнһең,
Һин йәншишмәне табырһың,
Минең илдә булмаған,
Ендәр илендә булған
Йәншишмәнең һыуы бар.
Шул йәншишмәне табырға
Һиңә минең бүләгем бар.
Ул бүләкте алғанса тиклем
Минең һиңә бер шартым бар.
Шул шартымды үтәһәң,
Һиңә бүләк бирермен, — ти. —
Донъяла бер алыҫ ерҙә,
Ҡайҙа икәнлеген бер кем белмәгән,
Унда барырға уйлағандарҙың
Береһе әйләнеп килмәгән,
Унда бер ҡош йәшәгән.
Йәшәгән шул ҡошто (*...уйлай. —* ***Р.С.***)
Шул ҡошто һин эҙләп табырһың.
Шул шартымды үтәһәң,
Минең илдә булмаған,
Аждаһа илендә булған
Йәншишмәне табырға,
Уның һыуын алырға,
Ауырлыҡтар үткәндә
Һиңә юлдаш булырҙай,
Булыр һиңә бүләгем”, — ти.

Хәҙер шартын һөйләп бирә. Донъяла бөтә ҡоштан матурлыҡ төҫөн алған, уның ҡайҙа икәнлеген, унда нисек барырға икәнлеген бер кем дә белмәгән бер аҫыл ҡош бар, шул ҡошто тапһаң һин, миңә алып килеп бирһәң һин, мин һиңә йәншишмәнең һыуын табырға ярҙам итергә бүләк бирермен, тигән бит инде. Хәҙер Урал батыр ошо һүҙҙе әйткәс, уйға ҡала. Ҡайтмай бит инде. Ниндәй бүләк булыр икән, тип уйлай. Шундай ауыр юлдарҙы үтеп булһын өсөн, ул ҡошто табыу өсөн ул ниндәй бүләк икән, тип уйлай ул. Шунан бүләкте алыр өсөн аҫыл ҡошто табып алып килергә тейеш бит әле ул. Шунан хәҙер уйлағас бер нисә көн үтә. Хәҙер батша ҡыҙына әйтә:

Алтын-көмөш тейәр йөгөм юҡ,
Яҡшылыҡтан башҡа уйым юҡ,
Ынйы-мәрйен тағыр йәрем юҡ,
Һиңә ярҙам ҡылайым,
Ата-бабам аманатына
Тоғролоҡ (мин) ҡылайым.

Шунан һуң хәҙер:

Һинең шартың үтәргә
Миңә юлға сығырға.
Шартымды минең үтәһәң,
Бүләк булыр тигәйнең,
Ул ни булыр бүләгең —
Шуны белеп китәйем (*уйлай. —* ***Р.С.***),
Ул ни булыр бүләгең —
Мин шуны белеп китәйем!

Шулай тигәс, батша ҡыҙы бүләк әйтә. Йомошто үтәргә китер алдынан Урал батыр һөйгән ҡыҙынан һорай (өләсәйем уны Һөмәйрә, йә һөйгән ҡыҙы тине). Һөйгән ҡыҙынан һорай:

— Ниндәй бүләк, белеп китәйем, — тип әйтә бит инде. Шунан хәҙер Һөмәйрә Уралға буласаҡ бүләген әйтә. Ул аны бирмәй бит әле!

*Әсмә инәй көйләй:*

Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,
Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тау-ҡаянан өркмәҫтәй,
Һис нәмәнән ҡурҡмаҫтай,
Аҡбуҙатым бар минең,
Толпар атым бар минең.
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙенә тиң күрмәгән,
Берәү менеп йөрмәгән,
Берәүгә баш эймәгән,
Һәр кемгә бүләк итмәҫтәй
Толпар атым бар минең,
Аҡбуҙатым бар минең *(2012 й.).*
*(Пауза, Әсмә инәй хәл ала. —* ***Р.С.****)*
Типһә, тау-таш сорғотор,
Сапһа, диңгеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта, тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай *(иптәш — 2011 й.),*
Күктә тыуып, шунда үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән
Аҡбуҙатым бар минең *(2012 й.),*
Толпар атым бар минең!
Ете дейеү күктә йөрөй,
Мәңге ҡыуып етә алмай *(етмәгән — 2011 й.),*
Әсәйемдән бирелгән,
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем —
Толпар атым бар минең,
Аҡбуҙатым бар минең.

Шул Аҡбуҙҙы бирәйем! *(Шуны һиңә бирәйем тиһә. — 2011 й.)* тигән дә, һүҙен дауам иткән *(Әсмә инәй икенсе көйгә әйтә башланы. —* ***Р.С.****).*

Йөҙөн һис тут ала алмай *(алмаҫтай — 2011 й.),*
Һис берәү кәр ҡыла алмай *(ҡылмаҫтай — 2011 й.),*
Берәүгә зыян ҡыла алмай *(ҡылмаҫтай — 2011 й.),*
Утта ла иремәгән *(иремәҫтәй — 2011 й. ),*
Бөтә донъя иретерлек
Әсәм Ҡояш һуғарған
Булат ҡылысым бар минең.
Утҡа төшһә, ут булыр,
Һыуға төшһә, һыу булыр,
Дошманына ыу булыр *(уйлай. — **Р.С.**).*
— Ошо көйҙө һеҙ ҡайҙан ишеттегеҙ?
— Шул, Мөьминә өләсәйемдең көйө ул!
Ен-бәрейҙең барыһын
Ҡуй-һарыҡтай өркөтөр
Булат ҡылысым бар минең,
Шул ҡылысым бирәйем! —
тигән дә атайына барған.

Урал күп тә уйлап тормаған, серле таяҡҡа атланып, хәҙер аҫыл ҡошто эҙләргә сығып киткән. Ҡиткән-киткән, бейек бер тау башына менеп ҡараһа, бик алыҫта тәңкә ҙурлығында, көмөш тәңкә ҙурлығында ялтырап ята бер нәмә. Нимә икән тип барып ҡараһа, бер күл, күлдең эсендә төрлө ҡоштар йөҙәләр. Уртаһында бик һылыу ҡош айырылып йөрөп тора. Ошо түгелме икән? Айырылып тора ул ҡош. Был ҡоштоң үҙе эҙләгән ҡош икәнен дә белмәй, шулай ҙа ул арбап тотоп ала. Хәҙер теге ҡош телгә килә: "Эй, егетем, мин бер батшаның ҡыҙы инем. Мине дейеүҙәргә... *(уйлай. — **Р.С.**)* Бер егет килгәйне. Үҙенә алам тип, алданы, алманы. Дейеүҙәргә кәләш итеп бирергә димләне. Мин дейеүҙәрҙән ҡасып, ҡош туны кейеп, ошонда йәшәйем. Хәҙер һин мине алып китһәң, дейеүҙәр мине күрерҙәр, тағы тотоп алырҙар", — тип әйткәс *(Әсмә инәй уң күҙен ыуып алды, уйланды... — **Р.С.**),* "Юҡ, мин барҙа һиңә дейеүҙәр тейә алмаҫ, ҡайҙа һинең атайың, ҡайҙа һинең туғандарың — шул ергә мин һине алып барайым", — тип алып китһә... Был хәҙер Һөмәйрәләргә алып килә. Шунан, икәүһенең дә килә торған юлы бер юл (ике туғандың).

Һөмәйрә менән был ҡыҙ осраша... *(Әсмә инәй уйлай. — **Р.С.**)* Һөмәйрә үҙенең бер туған һеңлеһе менән осраша, икенсе әсәнән тыуған булһа ла, барыбер аталары бер була, барыбер. Айһылыу менән ҡосаҡлашып күрешеп, саҡырып, Урал батырға бик ҙур рәхмәттәр әйтеп. Шунан һуң һары атты саҡыралар.

Тимер ҡаҙыҡ янында балҡып торған һары атты, йондоҙ булып балҡып торған һары атты саҡырып, Айһылыуҙы ебәрәләр нейгә, әсәһенә Айға. Самрау батшаның бит ике ҡатыны була, береһе Ҡояш, береһе Ай. Был Айҙың ҡыҙы була. Айға ебәрәләр, был ҡыҙ ял итһен тип.

Хәҙер Урал бер ни тиклем ял иткәндән һуң йәншишмәне табыу хисендә яна. Шунан Һөмәйрәгә әйтә: "Һылыу, һин бер миңә һүҙ әйткәйнең, бүләгем булыр тигәйнең. Ул ни ул бүләгең, мин шуны белеп китәйем", — ти. Шулай тигәс, Һөмәйрә уйға ҡала һәм атаһына бара. Атаһына булған хәлде һөйләп бирә. Уралды яратҡанын да әйтә, бүләк бирергә һүҙ биргәнен дә әйтә. Атаһы Һөмәйрәгә:
"Ҡыҙым, егет һөйһә, барырһың,
Ҡәрәкһә, бүләгеңде бирерһең.
Оло майҙан йыйына һин,
Батырҙарҙы йыйына һин,
Бөтә илде туйла һин.

Шул майҙанда бул һин,
Аҡбуҙатты саҡыр һин,
Аҡбуҙатың ни әйтер —
Уның һүҙен тыңла һин", — ти.

Шулай булғас, ул әле Аҡбуҙаттың да шарты булған! Һөмәйрәнең генә шарты булмаған. Шулай тип әйтә.

— Кемдең дә шарты булған? (***Р.С.***)

— Аҡбуҙатты тыңла һин, тей бит атаһы. Баяғы, Аҡбуҙат уға, уны хужа итәмеюҡмы әле. Аҡбуҙатты тыңла һин, ти. Аҡбуҙатты саҡырырға ҡуша. Хәҙер был атаһы риза булды бит инде. Һөмәйрә риза, Аҡбуҙатты бирергә атаһы ла риза. Хәҙер, (*уйлай. —* ***Р.С.***) Аҡбуҙат нимә ти әле... Аҡбуҙаттың һүҙен тыңла һин, ти. Шунан хәҙер зинданда бикле ятҡан кешене лә сығар һин, ти шатлыҡтан Һөмәйрәгә.

Шунан һуң хәҙер зинданда бикле ятҡан Уралдың ағайын сығарғас, Урал менән ағайы осрашып, хәл-әхүәл һорашып, күрешә. Үҙенең боҙоҡ уйҙарын инде әле асыҡ итеп һөйләмәгән Уралдың ағайы. Урал бөтә булғандарҙы һөйләгән һәм Аҡбуҙат менән булат ҡылысты ла әйткән. Хәҙер, ағайы көнсөл, ғәрсел, ағайы ҡанһыҙ. Урал хәҙер ҡайтыр ҙа атайыма һөйләр, маҡтаныр, ул дан алыр. Мин дә бер дан алайым, Уралды еңәйем тип, хатта Уралды үлтерергә лә уйлаған.

Һөмәйрә (*Әсмә инәй иҫләй, уйлана... —* ***Р.С.***) Ә..! Урал бер ятһа, өс көн, өс төн йоҡлаған. Шунан был шуға күрә Уралдың йоҡлағанын көткән, теге арыған ваҡытта.

— Мөьминә инәй шулай һөйләй инеме?

— Эйе, өләсәйем шулай һөйләне, өс көн, өс төн йоҡлаған тине Уралды.

Мин теге китаптағыны белмәйем. Шунан, өләсәйем әйтте өс көн, өс төн йоҡлаған ти, арыған ваҡытта. Шунан хәҙер ҡыҙҙар ҡуйып ҡарау(ыл)латҡан Уралды. Ағайы Һөмәйрәгә зыян килтерә алмаған. Ағайы хәйләгә күсә. Беҙ серле таяҡты алайыҡ, ти Уралға. Аҡбуҙат менән булат ҡылысты үҙебеҙҙең ҡулға төшөрәйек, нисек тә булһа төшөрәйек тә, ти.

"Ошо илде емерәйек.
Сәмреҡош илен емерәйек,
Аҡбуҙатҡа, булат ҡылысҡа мин хужа булайым,
Һөмәйрәгә мин ир булайым,
Мин бит һинең ағайың", — ти.

Шунан хәҙер Урал әйтә:

"Был ил берәүгә зыян ҡылмаған,
Берәүҙең ҡанын ҡоймаған,
Шундай татыу Ил булған,
Ҡыҙ алам тип (беҙ) исем һатмайыҡ,
Яманатлы булмайыҡ", — ти.

Яманатлы, баяғы, яман исемле булмайыҡ тип, шулай ти инде. Шунан ҡыҙы һөйһә алырһың, бүләк итһә... (*уйлай. —* ***Р.С.***). Бүләк итһә, Аҡбуҙат менән ҡылысты һин алырһың тип әйткәс, хәҙер Урал, әй (*Әсмә инәй уйланды. —* ***Р.С.***). Уралдың ағайы үҙенең бәхетен һынап ҡарарға уйлай һәм Һөмәйрә менән аулаҡта осрашып әйтә:

"Һылыу!
Һинең илеңә килгәс тә,
Һине тәү күргәс тә,
Һине мин яҡын иттем.

Ә һин миңә әйләнеп тә ҡараманың. Әгәр теләгең булһа, бергә булайыҡ, мин һине кәләш итеп алайым", — тип әйтә. Мин һине кәләшлеккә алайым тигәс, Аҡбуҙатҡа, булат ҡылысҡа хужа була инде. Йәнәһе. Хәҙер Һөмәйрә әйтә (*хәтерен яңырта, уйлай. — **Р.С.***).

Әй-ә, баяғы ниндәй бүләк тип әйткәс, Һөмәйрәнең һүҙен әйтмәнем бит әле?!

Хәҙер Уралдың ағайы әйтә бит инде. Мин һиңә өйләнәйем, һине кәләш итеп алайым, ти бит инде. Аҡбуҙатҡа, булат ҡылысҡа хужа булайым тип әйткәс, хәҙер, атайы әйтте бит инде Һөмәйрәгә, майҙан йый ҙа һин Аҡбуҙатты саҡырың тип. Хәҙер Уралдың ағайына былай ти:

— Бик алыҫта, бейектә Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо ҡашында Аҡ йондоҙ булып балҡып торған Аҡбуҙатым бар минең. Мин оло майҙан йыяйым, шул майҙанға Аҡбуҙымды саҡырайым. Аҡбуҙым ни әйтер.

Уның һүҙен тыңла һин, тигәйне бит атаһы! Шунан хәҙер Аҡбуҙҙы саҡырған. Һөмәйрә Аҡбуҙатты саҡырған. Һөмәйрә хәҙер Урал ағайына яуап бирә:

Башына йүгән кейелгән,
Һыртына эйәр һалынған,
Эйәренең ҡашына
Булат ҡылыс тағылған,
Ҡылысының ҡашы алтын,
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Дағалары лыс алтын *(2012 й.)*.
Ужарланып, баш һелкеп,
Айға-көнгә ҡараған,
Үҙемә тиң булһын тип,
Батыр егет һайлаған,
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған,
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Атҡолаҡтай иренле,
Һарыналай аҙаулы (*көй яйлай бер һүҙҙә. — **Р.С.***),
Башкүнәктәй танаулы,
Ҡыйғыр бөркөт ҡанатлы,
Аждаһа-йылан тамаҡлы.
Ҡуян күҙҙәй үткер күҙ.
Урайы ҡуш, яңаҡ ас,
Һылыу муйыны бер ҡолас,
Еңел текә тояҡлы,
Үткер ҡылыс тырнаҡлы,
Аждаһа-йылан тамаҡлы,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы.
Алғыр бүре күҙеләй,
Күҙ бәбәген сылатыр,
Елһә, ҡоштай елпенеп (*көйө яйлай бер һүҙҙә. — **Р.С.***),
Артынан саң уйнатыр,
Олоғайған ҡартты ла,
Менһә, йәп-йәш ир итер.
Йондоҙ булып атылыр,
Утлы йәшен йәшнәтер,

Тау-таш ҡая *(көйө яйлай)* аҡтарыр,
Ғәрәсәт-дауыл сығарыр,
Бөтә енде дертләтер,
Донъя ғәмен уятыр.
Тирә-йүнгә шом һалыр,
Осораған бер кешене (*көйө яйлай бер һүҙҙә. — **Р.С.***)
Хайран итер, уйлатыр —
Бына шундай Аҡбуҙат,
Күҙ күрмәгән толпар ат,
Толпар ат, Аҡбуҙат!

Ошо ҡиәфәттә Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо ҡашындағы аҡ йондоҙ булып балҡып торған Аҡбуҙат йондоҙ булып атылып атлығып килеп төштө, ти, һәм Һөмәйрәнең алдына килеп башын эйгән, ти. Шунан Һөмәйрәгә баш эйгән, Аҡбуҙат телгә килгән. Әй, юҡ әле (*Әсмә инәй туҡтап алды. — **Р.С.***). Аҡбуҙат килеп төшкәс, Урал батырҙың яратҡан ҡыҙы (Һомай тимәне өләсәйем) Һөмәйрә шунда Аҡбуҙҙатың өлпә сәсенән ялының осона тиклем һөйөп һыйпап, уның муйынына башын һала. Муйынына башын һалып, шунан әйтә инде (*уйлай, көйләп әйтә, "Ҡылыс көйө", "Аҡбуҙат" көйө ҡабатлана. — **Р.С.***).

Күктә торҙоң буҙ булып,
Батыр көтөп зарығып,
Кеше ҡаны булмаған
Батырҙарҙы ырғытып.
Мин һайлаған батырҙың
Берәһен һайлап алманың.
Үҙең һайлап батырың
Берһен миңә бирмәнең,
Бына килер батырҙар,
Һине (*уйлай*) көтөп ятырҙар.
Батырлығын һайлапмы,
Матурлығын һайлапмы,
Берәһен һайлап алырһың,
Үҙеңә юлдаш ҡылырһың *("иптәш", 2011 й.)*.
Һиңә иптәш ир булыр,
Миңә һөйгән йәр булыр, —

тип Һөмәйрә әйтте, ти. Хәҙер Аҡбуҙат телгә килгән. Аҡбуҙат телгә килә. Уға батыр ғына Кеше кәрәк бит. Шуға матур тураһында һүҙ әйтмәй, ә батырҙы әйтә:

Матур миңә тиң булмаç *(дан булмаç — 2012),*
Өçтөмдә йөрөр ир булмаç,
Мин сапҡанда ел ҡубыр,
Ташта ятып түҙә алмаç,
Һыу ҡайнашыр, урғылыр *(тулҡыныр — 2012),*
Һыуҙа балыҡ йөҙә алмаç *(түҙә — 2012),*
Ҡаф тауына типте ниһәм *(2011),*
Он-талҡандай ыуалыр.
Тирә-яҡтағы тереклек
Берәһе ҡалмай ҡыйралыр *(2012)*.
Мин сапҡанда ел ҡубыр,
Таш та ятып түҙә алмаç.
70 батман ауыр ташты

Ҡүтәреп күккә сөймәгән,
Өс бармағы осонда,
Төшөрмәйсә тотмаған,
Тоттормайса (*Әсмә инәй уйлай.* — ***Р.С.***)
Ҡеше батыр була алмаҫ *(2012)*,
Ҡеше батыр ир булмаҫ.
Мине алам тигән ир,
Хужа булам тигән ир,
Ҡөсөн һынап ҡараһын,
Шунда мине менергә
Баҙнат итеп ҡараһын! —

тип, Аҡбуҙат *(интонация үҙгәрә)* ғорур, эре генә маһайып баҫып тора, ти. Бына 70 батман ауырлығындағы ташты таптылар, йыйылдылар батырҙар, тау башына менделәр һәм Аҡбуҙаттың шартын үтәү өсөн көрәшкә сыҡтылар. Ташты батырҙар алмашлап күтәреп ҡарай, ти. Ҡыбырлау түгел, әҙ генә лә ҡыймылдамай ҙа, ти! Ай тарталар, ти, йыл тарталар, ти, ҡыбырлата алмайҙар. Инде ташты күтәреү Уралдың ағайына килеп, сират еткән, ти.

Теге Шүлгән (Шүлгән тимәне өләсәйем, ағаһы тине. Шүлгәнде миңә атайым әйтте, исеме булған тип) ике тапҡыр күтәреп ҡарай, тубыҡтан ергә бата, ҡыҙарына, бүртенә, ти. Уралдың ағайы шул хәтле сәмләнеп, ташты күтәрергә әле ул яҡҡа сайҡай, әле был яҡҡа сайҡай, ҡара тиргә төштө, тубыҡтан ергә батты, ти. Был хәлде күргәс, Һөмәйрә Уралға: “Йә, егет, инде һин күтәреп ҡара!” — тигән.

— Әсмә инәй, ташты нисек итеп сайҡағанын Мөьминә инәй күрһәтә инеме?

— Эйе, эйе, күрһәтә ине.

(*Әсмә инәй ике ҡулын бергә бер уңға, бер һулға елпеп күрһәтте, таш күтәргәндәй итеп.* — ***Р.С.***).

Таш ҡуҙғалыу түгел, ҡыймылдамай ҙа, ти. Таш ҡуҙғалғас бит, урынынан әҙерәк булһа ла шылырға тейеш. Ҡыймылдамай ҙа, саҡ ҡына булһа ла, ти. Мынаулайтып ҡына бына саҡ ҡына ла *(Әсмә инәй кәүҙәһен сайҡап алды)*.

Урал үҙенең ағайының хөрәсән икәненә аптырап, оялышынан ҡара тиргә батып, ғәрлегенән түҙмәй, йоҙроҡлап килеп ташҡа бәргән, ти, теге таш әллә ҡайҙа атлығып киткән, ти. Ташты шунда “һә” тигәнсә Урал батыр тотоп алып, өс бармағы осонда күтәреп күккә сөйгән, ти. Иртә ине, төш етте, төш ауҙы, кис булды, ырғытылған таш онотолдо, кешеләр үҙ эштәре менән мәшғүл булды. Бына, кискә табан һис ишетелмәгән бик яман тауыш ишетелде. Ҡешеләр ахрызаман етте тип, ҡайһыныһы доға ҡыла, ҡайһыныһы тәүбә ҡыла. Урал үҙе ырғытҡан таштың төшөп килгәнлеген шәйләп ала ла, өс бармағы осонда ғына тотоп, күтәреп (әле дейеүҙәр батшалығын емермәгән бит әле ул) сөйөп, дейеүҙәр батшалығы яғына ырғытып ебәрә.

— Таш төшкәндә лә өс бармағы осона тотамы?

— Эйе, өс бармағы осонда тип, әйтте бит инде Аҡбуҙат. Шуға өс бармағы осонда күтәрә лә, хәҙер ҡайһы яҡҡа? Шул, арт яғына *(әйләнеп баҫа)* ҡарап тора, арт яғына баш аша алдан ташлап ебәрә *(Әсмә инәй баш аша ташлау хәрәкәтен күрһәтә: “Быналай тип ырғытып ебәрә!”)*.

Бер генә ҡулы менән бит әле! Бер бармағы менән түгел, өс бармаҡ менән! *(Әсмә инәй уң ҡулының өс бармағын бергәрәк йыйып, турайтып күрһәтте)*.

Буҙаттың шарты бит, ти. Ике ҡулы менән ырғытмай бит! Шунан һуң хәҙер ғорур баҫып торған Аҡбуҙат Уралдың алдына баҫты, ти: “Һин, егет, батыр булдың, минең хужам булдың!” — тип әйтә.

Хәҙер Һөмәйрәнең атаһы килеп, Уралдың ҡулын ҡыҫып: “Аҡбуҙаттың шартын үтәнең, егет, минең ҡыҙымдың кейәүе бул һин!” — тигән. Урал менән Һөмәйрә матур итеп, тантаналы рәүештә туй үткәрәләр.

Шулай итеп, матур итеп йәшәп ятҡан ваҡытта хәҙер Һөмәйрә, Һөмәйрәнең атаһы, Урал Айһылыуҙы Уралдың ағайына тимләргә һөйләшәләр. Ләкин көнсөл Шүлгәнгә кәләш кәрәкмәй. Уға дан кәрәк. Аҡбуҙатты нисек тә булһа ҡулға төшөрәйем, Уралды еңәйем... Уралды ул имен-һау ҡайтармаҫҡа уйлай. Атаһына дан алып ҡайтыу өсөн. Серле таяҡты урлай әле. Серле таяҡты урлай ҙа... Уралдың ағайы урлай. Ә Уралдың ағайы әйтә... (*ағайына әйтә тип, аныҡлап ҡуйҙы Әсмә инәй. — **Р.С.***).

Беребеҙ серле таяҡ менән, беребеҙ Аҡбуҙат менән дейеүҙәр илен емерәйек, ти Урал, һиңә беҙ Айһылыуҙы кәләш итеп алып бирәйек, ти. Ләкин ул барыбер дан Уралда ҡала тип уйлай ҙа, үҙе данлы булыр өсөн Уралдың шартына ҡаршы килә. Уралдың серле таяғын урлап ҡаса. Шунан кешеләр бик матур йәшәп ятҡан ваҡытта хәҙер, Урал үҙенең ағайының һаман да мәкерле уйҙа йөрөгәнен белә. Таяҡты урлағас, белә. Ул Шүлгән һыу батшаһы, дейеүҙәр батшалығына бара ла бөтә хәлде һөйләп бирә. Оҙаҡламай Урал килеп, беҙҙе емерә, тип, уларҙы ҡурҡыта... *(уйлай)* Шуға һыу батшаһы, дейеүҙәр, аждаһалар донъяны һыу менән ҡаплай.

Урал батыр Аҡбуҙатҡа атланып, булат ҡылысы менән уңға-һулға һелтәп китеп бара. Ҡылыстың осо уйып, тейеп барған ерҙә күлдәр ҡалған, унан айырылып сыҡҡан тупраҡтан ҡалҡыулыҡтар барлыҡҡа (г)килеп, тау теҙмәләре, ҡоро ер барлыҡҡа (г)килә. Аждаһаларҙы, дейеүҙәрҙе емерә. Уларҙың ҡотһоҙ (г)кәүҙәһенән бик ҙур, яман ҡотһоҙ тауҙар барлыҡҡа килеп ҡала. Өйөлөп ятҡан уларҙың (г)кәүҙәһенән тауҙар барлыҡҡа килә. Уралдың, уның ағайы шунда барлыҡҡа килгән ҙур бер күлгә сума. Күлгә сума, шунда ул ағайы үлгән, шиңгән. Шуларынан Шүлгән тигән күлдең исеме тороп ҡалған! Хәҙер, Уралдың ағайы шул күлдә үлгәс, ул ергә ерләнмәгән бит инде, тупраҡҡа ерләнмәгән. Күлдә уның ҡаны ҡалған. Ул ҡанды эсергә ярамағанлығын белде бит инде аталарының иленән. Ағайы шул, ҡан эскәндән, шул ағайы тыңлауһыҙ булып ҡалды. Шуға күрә кешеләргә күлдең һыуын эсмәҫкә бойора (Урал). Шуға күрәбеҙ, ана шунан ҡалған тип әйтәһем килә.

“Урал батыр” эпосында бит ул бик күп беҙҙең башҡорттоң ана шундай нимәләре, аҡылы килеп сыҡҡан. Ана шул ваҡыттан. Бына, беҙ еләккә, йыуаға йөрөгән ваҡытта өлкәндәр әйтә ине: “Аҡҡан һыуҙан таҙа булыпумай”. Аҡҡан һыуҙан таҙа булыпумай, күлден һыуын эсмәгеҙ, бик эскән хәлдә лә, бик булмағанда, бына, аҡмаған һыу, тоноҡ ятҡан һыу, аҡмаған һыу булған хәлдә лә ул ярамай. “Бына ҡайберҙә ул шишмә сығып ятҡанда ағырға көслөгө юҡ (*көсө юҡ. — **Р.С.***), ҡороп барамы — шуны ла “бисмилла” итеп, яулыҡтың осо менән һөҙөп эсергә ҡуша торғайнылар. Һөҙөп эсергә. Шуға күрә беҙҙең башҡорт йыйналған һыу түгел, аҡҡан һыу буйына ултырған. Ауылдарҙы бит аҡҡан һыу буйына һалған. Ә ҡоҙоҡ ҡаҙыу һуңғараҡ сыҡҡан бит ул башҡортта. Аҡҡан һыу буйына ултырған башҡорт!

— Шул тоноҡ ятҡан һыуҙы ла һөҙөп эсергә ҡушҡанмы? Ҡоҙоҡтан?

— Ҡоҙоҡтан түгел, һөҙөлмәй, ул бит сығып ята, яңы һыу... Ҡоҙоҡтан һөҙөлмәй.

Шунан хәҙер ағайы үлеп ҡалды бит инде. Былар хәҙер йәшәп яталар. Хәҙер Уралдың батырлығын ишетеп, саҡ йәне сыҡмаған бер һөлдә килеп сыға. Үҙе тере була, үҙе һөлдә инде, бер һөлдә, тине өләсәй. Бер һөлдә килеп сыға, үҙе тере. Үлә алмай ҡаңғырып, тиңкереп, һәлберәп йөрөгән бер һөлдә. Йыйһаң, ҡаны ҡалаҡҡа тулмаҫ, һемереп алһаң, бер йотом булмаҫ, ти. Шул Урал йәшәгән ергә (г)килеп сыға. Шунан хәҙер был бабай әйтә Уралға:

Йәншишмәнең һыуын эсмәгеҙ,
Мәңге ҡалам тиһәгеҙ,
Эшләгеҙ һеҙ яҡшылыҡ, Яҡшылыҡ!
Утта ла янмай яҡшылыҡ,
Һыуҙа ла батмай яҡшылыҡ.
Ҡуккә лә оса яҡшылыҡ,
Донъяла ул шу йәшәү бер мәл генә, — ти.—
Донъя ул фани ғына,
Үлем ул йола ғына, — ти.

Шуға күрә лә, үлем ул йола, ти. Шуға (г)күрә, бына хәҙер кешенең өс туйы була, тип әйтәләр. Бишек туйы, никах туйы һәм ошо ерләгәндәге. Ерләү ҡыйын булһа ла, уны (мәрхүмде) бит бик ололап ҡуялар. Мөхәммәт пәйғәмбәр әйткән бит: "Ҡем, ерләгәндә кеше күп булғаны яҡшы", — тигән.

Бына шуға күрә хәҙер халыҡ уны шунда тәбрикләү, иҫкә алыу, ерләү, ти. Ерләү ҡыйын. "Был донъяла ике ҡыйынлыҡ бар. Береһе — үлем, береһе — яңғыҙлыҡ", — тип йырҙа йырлана, үлем ҡыйын инде. Шулай ҙа кешенең күп булыуы, хөрмәтләүе, шундай хөрмәтләүе барыбер һуңғы туйы тип атала.

Шуға күрә, үлем — ул йола ғына, ти. Шунан хәҙер Урал батыр тураһында. Мин мәңге ҡалам тип, теге һөлдә мәңге һыуы эскән батыр була бит инде. Урал да ҡасандыр батыр булған. "Мин Йәншишмәнең һыуын эстем, бына саҡ сыҡмаған йәнем бар. Йәншишмәнең һыуын эсмәгеҙ", — тип ул бабай әйтә.

Шунан Урал хәҙер баяғы ҡотһоҙ ятҡан дейеү-аждаһаларҙың кәүҙәһенән яралған ҡотһоҙ тауҙарға мәңгелек йәшәү бирер өсөн Йәншишмәнең һыуын эҙләп таба. Шунда ла баяғы ҡасып ҡотолған һәр төрлө шайтандар Йәншишмәнең һыуын болғап бөтөргән булалар. Тамсылап ҡына алып, ул малдың мөгөҙө менән алып, шуны ҡотһоҙ тауҙарға, итәктәренә һибә. Урал һибә.

— Малдың мөгөҙө менән?

— Эйе, малдың мөгөҙө менән алып ҡайта. Һыуҙы алып ҡайта. Эйе.

Элек бит бына оҙон юлға сыҡҡанда ла малдың мөгөҙөн һауыт итеп алып сыҡҡандар бит инде. Бокал формаһында ла тотонғандар. Әйтәйек, бына ҡымыҙ алғанда, ҡуржын менән аттың тиреһенән һауыт яһап алып, ҡымыҙ алһа ла, шул ағас һауыт алмағандар. Ағас ярыла, быяла һауыт булмаған. Мөгөҙ һауыт ярылмай. Шуға (г)күрә, мөгөҙ һауыт ана шул Уралдан ҡалған ул. Шунан алып ҡайтып, баяғы ҡотһоҙ тауҙарға һипкәс, донъяла йәшеллек ана шул Йәншишмәнең һыуын бөрккәндән һуң мәңге йәшел шыршылар, ҡарағайҙар, артыштар тороп ҡалған, ти. Улар шуға мәңге йәшел, ти. Шунан хәҙер Урал шулай итеп йәшәй, Урал менән Һөмәйрә икәүенең Иҙел тигән улы тыуа. Хәҙер Уралға әҙерәк тынысланып теге ҡатындарын күргеһе килә. Шунан Һөмәйрәгә әйтә, үҙе хәҙер өлкәнәйгән Урал. Һин шуларҙы табалһаң икән, ти.

Эҙләргә ҡуша Һөмәйрә, ҡоштар батшаһының ҡыҙы бит инде. Хәҙер аҡҡош тунын кейеп, Уралдың уландарын эҙләргә сыға. Уның уландары үҙҙәре батыр булалар, атаһына оҡшап. Үҙҙәре атаһын эҙләп киләләр, килеп етәләр. Шунан өс улы уның эргәһендә. Урал әйтә инде:

"Һәр ваҡытта бергә булығыҙ,
Татыу йәшәгеҙ.
Үҙегеҙҙе генә уйламағыҙ, халыҡ өсөн йәшәгеҙ,
Халыҡ та яҡшы йәшәһен", — тип.

Бына, үҙенең иле бер ниндәй ҙә һуғыш, ҡан ҡойош күрмәгәс, улдарына шулай васыят әйтә... Һөмәйрә Уралдың ҡатындарын эҙләп китә. Өс улы Уралдың эргәһендә ҡала.

— Уралдың балаларына әйткән васыятын көйләп әйтмәнеме Мөьминә ҡартинәйең?

— Күп көйләне ул өләсәйем, көйләгәндер ул. Әйтәм бит, бына әле яңы иҫкә төшөрәм, мөғжизә кеүек. Әгәр ҙә иҫләһәм, әйтермен. Көйө бар. Аҙаҡтан иҫемә төшөрөрмөн әле. Хәҙер, эйе! Туҡтап тор. Тороп тор. Эйе. Хәҙер, хәҙер, хәҙер (*Әсмә инәй уйлай. — **Р.С.***). Шунан хәҙер шул... Васыят әйтә:

“Олоно оло итеп белегеҙ,
Кесене кесе итеп белегеҙ,
Туғандарҙың ҡәҙерен белегеҙ,
Үҙ-ара татыу йәшәгеҙ,
Бер-берегеҙҙе ташламағыҙ,
Мин яңғыҙ булдым.
Яңғыҙлыҡ ярҙам итмәй,
Һеҙ бер-берегеҙгә татыу булығыҙ”, — ти.

Уландарына шулай тип әйтә инде. Ағайы бит ярҙам итмәй ул. Хәҙер, уландарының эргәһендә Урал батыр йән бирә.

Шунан йондоҙ атылып, Һөмәйрәгә сәләм бирә. Һөмәйрә теге ҡатындарҙы алып килеп етә. Һөмәйрә Аҡҡош тунында була. Хәҙер ул тере сағында аҡкош булып киткәс, тере сағында күҙенә күренә алмағас, Һөмәйрә шул аҡкош ҡиәфәтендә ҡала. Шуға күрә, аҡҡоштоң итен ашарға хәрәм була. Ашарға ярамай, хәрәм иҫәпләнә, кеше тип. Беҙҙә аҡҡош итен ашамайҙар. Кеше тип. Тере сағында аҡкош булып осоп китте Һөмәйрә. Хәҙер ана шул аҡкош рәүешендә килергә тейеш ине лә, маңлайынан үбергә тейеш ине Уралдың. Һөмәйрә шул аҡкош ҡиәфәтендә ҡала. Урал тере сағында килеп, маңлайынан үбергә тейеш ине Уралдың. Шуға (г)күрә, хәҙер ул уны эшләй алманы. Бына хәҙер Урал тере түгел, шул аҡкош ҡиәфәтендә ҡала Һөмәйрә. Кеше нимәһендә (*ҡиәфәтендә. — **Р.С.***) ҡала алмай.

— Ҡайтанан кеше булһын өсөн Уралды килеп үбергә тейешме?

— Эйе, үбергә тейеш була, маңлайынан үбергә тейеш. Элек беҙҙең халыҡ маңлайҙан үпкән. Элек бына атайым, балалары күп булғас (*купбуъас*) ярата торғайны, маңлайҙан атайым үбеп ала торғайны. Бер яҡтан ҡайтһа.

Шунан хәҙер бына Урал менән Һөмәйрәнең мөхәббәтен шунан белеп әйтәләрҙер инде, тип уйлайым. Аҡкош бит инде Һөмәйрә. Аҡҡоштоң мөхәббәтен ишеткәнем бар. Инә аҡкош бер нисә булырға мөмкин бит инде. Ата аҡкош бер була. Ата аҡҡоштоң иң яратҡан инәһе (аҡкошо) үлһә, үҙе лә йәшәмәй, башын ташҡа һуғып үлә. Шуны ишеткәнем бар. Уларҙың мөхәббәте бик көслө, шуны ишеткәнем бар. Был эпостан түгел.

— Тимәк, бөтә аҡкош та улай ергә ырғытмай үҙен?

— Ата аҡҡоштоң ҡатыны үлһә, яратҡаны ғына үлһә, шулай, күккә оса ла, ергә ташлана, ти. Яратҡан инә аҡкош үлһә, башын ташҡа һуғып үлә ата аҡкош тигән хәбәр бар беҙҙең яҡта. Шуға күрә ҡатын менән ирҙең бәхетле йәшәгәненә әйтәләр: уларҙа аҡкош мөхәббәте тип. Бына шуға:

Һайыҫҡандай һаҡ бул,
Торналай тоғро бул,
Аҡҡоштай мөхәббәтле бул! —

тигән һүҙ бар. Шуға күрә, шундай тоғро кешеләрҙе лә аҡкош мөхәббәтле, тиҙәр. Мөхәббәтле кешеләр бер-береһенән оҙаҡ ҡалмай үлһәләр, бәхетле кешеләр шулай була, тиҙәр. Бына минең атайым менән әсәйем шулай булды. Атайым 29 июндә 1993 йыл үлде, ә әсәйем 29 октябрҙә үлде. Бына, числолары тап килеп тора! Шу-

нан кешеләр әйткән була инде, бына, бәхетле кешеләр шулай. Уларҙың яҙмышы шулай, тип әйтәләр инде. Семьяларының яҙмышы аҡҡоштар яҙмышына тиң, тип әсәйемде ерләгәндә әйттеләр.

Шулай итеп, хәҙер Уралды ерләйҙәр инде. Тирә-яҡтағы бөтөн халыҡ белгәс, ҡәберенә һәр береһе хушлашҡан кешеләр берәр ус тупраҡ һалып, Уралтау теҙмәләре барлыҡҡа килгән. Тау Уралтау тип аталған. Шунан хәҙер халыҡтар күбәйеп киткән, ҡоштар күбәйгән, баяғы донъяға тереклек артһын тип. Йәншишмәнең һыуын һипте бит инде, хәҙер күбәйеп киттеләр инде.

Шунан хәҙер, кем, һыу етмәй башлай. Баяғы, күл һыуын эсмәҫкә тип бит инде, бойорҙо. Бәләкәй шишмәләр, бәләкәй йылғаларҙың һыуы етмәй. Хәҙер уландары уйға ҡалалар, нисек итеп һыу табырға. Шунан Һөмәйрә әйтә уландарына: “Атайығыҙҙың аманатын ҡайһылай ҙа үтәгеҙ!”

Хәҙер улар, аттар, ҡабаттан йондоҙ булып торалар. Аҡбуҙат та, һары ат та, хужалары булмағас, Тимерҡаҙыҡ йондоҙо ҡашында йондоҙ булып торалар. “Атайығыҙҙың булат ҡылысы ҡалды бит!” — тип әйтә Һөмәйрә. Шунан өлкән улы Урал тауының иң бейек еренә баҫып, ҡылысты ҡаҙай. Ҡаҙай ҙа һура, тартып алһа, атлығып һыу сыға, йылға ағып китә! Был Иҙел йылғаһы булып китә! Шунан икенсе улы Яйыҡ. Яйыҡ ҡаҙай — Яйыҡ йылғаһы ағып китә. Шунан өсөнсө улы Һаҡмар ҡаҙай — Һаҡмар йылғаһы ағып китә! Иҙел... *(Әсмә инәй уйлай)* Нөгөштө әйтмәне. Нөгөштө һөйләмәне өләсәйем. Өс ҡатынынан өс улы, тине. Иҙел, Һаҡмар, Яйыҡ! Иҙел — Һөмәйрәнеке. Шунан теге кеше ашағандан (ҡыҙына өйләнеп китте бит әле!) — Яйыҡ, шунан йыландар батшаһы ҡыҙынан — Һаҡмар. Ул анда өйләнеп китте бит. Шунан, шулай итеп, өс улынан өс йылға ағып китә.

— Уландарының исемен әйтә инеме Мөьминә инәй?

— Эйе, әйтте, әйтте.

— Ә ҡыҙҙарының исемен?

— Ул Сәмерҡош тип әйтте, Самрау тимәне. Һөмәйрә менән Айһылыуҙы әйтте. Айһылыу! Таңһылыу түгел, Айһылыу. У-у-й, хәтер тигән нәмә юҡ миндә хәҙер, Айһылыу ул!

Хәҙер Сәмреҡоштоң ике ҡатыны булған, береһе — Ҡояш. Ҡояштан тыуған Һөмәйрә, тип әйтте. Ә икенсе ҡатыны Ай булған, Айҙан тыуған Айһылыу. Бына шуларҙың бишәүһен, шунан өс улының исемен әйтте өләсәйем. Ә-ә, Хызыр Ильясты әйтте!

— Шунан, Нөгөштө әйтмәнеме ни?

— Юҡ, Нөгөштө әйтмәне! Башҡортта бит өсәү әйтелә күберәген. Өс ҡатын була. Өс башлы йылан, йә ете. Дүрт башлы йылан юҡ та инде. Шулай тип, үҙемсә уйлайым.

Шунан хәҙер нимә. Уралды ерләгәндәр инде. Шунан йылғалар барлыҡҡа килеп, кешеләр гөрләтеп йәшәп яталар, ти, уралып ятҡан Уралда. Шул ваҡыттан башлап беҙҙең ата-бабаларыбыҙ шул уралып ятҡан Уралда йәшәгән!

“Ә-һе-һе-ү!” *(Әсмә инәй тәрән итеп, оҙон тын алып ҡуйҙы)*. Матур һоро күҙҙәре тулы нур бөркөп, ҡәнәғәт йылмайҙы: “Бына бит, мөғжизә кеүек һөйләнелде лә һа. У-у-уй Аллаһ”...

— Хәҙер беҙ йәшәйбеҙ, киләсәктә ҡалған быуындар иҫән-һау йәшәр, тип өмөт итәбеҙ. Шулай тип “Уралып ятҡан Уралда” тигән ҡобайырҙы көйләп әйтеп ҡуя ине өләсәй.

— Ошо ҡарыһүҙгә ҡушып, ҡобайырын әйттеме?

— Эйе! Аҙағында гел әйтә ине көйләп. Мин онотҡанмын. Уныһын теге, онотҡанмын, тип уйлағайным.

Тегеләренең барыһының көйө бар. Ә китапта был “Уралып ятҡан Уралда”ның көйө юҡ, тип яҙылған. Минең атайым йырсы булғас, атайымдан һораным. Атайым әсәйеңдән һора, тине. Әсәйем дә белгән, өләсәйем дә, әсәйемдең һеңлеләре — барыһы йырсы ине. Бер һеңлем бар, туҡһан йәштә — һаман йырлай! У-уй, әкиәтте күп белә торғайны. Хәҙер әкиәтте беләһеңме, тиһәң: “Әй, хәтер. Апайым, бер ни белмәйем”, — ти. Әсәйемдең һеңлеһе йырлар күп белде. Әсәй, йырла инде, ике һеңлең дә йырлай — ниңә йырламайһың, тим. “Мынау ҡарттың алдынан сығып, ҡалай тип йырлап ултыраһың”, — тип, баяғы, баш биргән дә ҡуйған атайыма. Шунан теге көйҙө әсәйеңдән һора, тине. Әсәйем әйтте, хәҙер нишләмәйем, һуңғараҡ әйтермен, тине. Шунан ул көйҙө оноттом бит инде. Мин бит нотаға һала белмәйем. Шул Баймаҡта шул “Уралып ятҡан Уралда”ны үҙем сығарҙым, тип әйттем. Хәҙер, фольклор менән булышып алып киттем бит инде. Атайымдан һорайым, әсәй ауырый. Шунда ул бына ошо көйҙө иҫенә төшөрҙө бит! Мына өләсәң (*Мөьминә әбей. — **Р.С.***) ошолай тип көйләне, тине. Әсәйем әйтте! Шунан баяғы “Уралып ятҡан Уралда” көйөн иҫкә төштө, иҫенә төшөрҙө бит! Халыҡ көйө ул. Шулай булып сыҡты. Ишмулла Дилмөхәмәтов көндәрендә Сания Сөләймәнова яҙып алды минән. Шулай.

— Урал нимә менән ауырыған?

— Ҡартайған тип һөйләй торғайны өләсәйем. Ҡартайған. Анау хәтле йөрөгәндә, баяғы, йонсоғандыр. Ҡартайып үлә ул... Эйе... *(тауышы ҡалтырап, ҡалтыраны, үҙгәрә Әсмә инәйҙең, уйланды)*. Ул бит ауырыуға бирешмәй бит. Ул көслө булған. Мәңге йәшәй алмай бит. Батыр булған. Ауырыуға бирешмәгән, ҡартайған. Ул белә бит инде, ҡартайғанын да белә.

Бына беҙҙә шуның өсөн башҡортта нимә ти бит инде: “Үлемде кеше ҡаршыларға тейеш, үлемдән ҡурҡмаҫҡа тейеш”. Бына минең атайым хатта уҡынып ятты. Уҡый-уҡый ҙа: “Торғоҙоғоҙ!” — ти. Доға ҡылғанда ятып ҡылырға ярамай икән, ятҡанда гел уҡып ята ине. Торғас, баяғы доға ҡыла.

Атай үҙе доға уҡып, ҡырын ятҡас, үҙе белгәндер инде. Хатта матур булып, төп-төҙ әҙерләнеп китте.

2003 йылда шуны һөйләп, Әбделнасир тауына ҡарыһүҙ сығарҙым. Вәзәм тигән ауыл янында, Һаҡмар буйында, Таутүбә тигән тау бар. Шул тауҙың башында аждаһа йәшенеп ҡалған. Күл булған, тип һөйләй ине география уҡытыусыһы. Таутүбәлә булған. Шайтантау заказнигы бар. Шунда иң һәйбәт ҡурай шул Хәйбуллала, Вәзәм янында үҫә, тинеләр.

— Ниндәй ул ҡотһоҙ тау?

— Ҡотһоҙ тау, бер файҙаһы ла юҡ инде. Шунда һыу бөрккәс, шыршы, ҡарағай үҫә.

— Дейеүҙәрҙе күрһәтә инеме өләсәйең?

— Ҡара-һоро, һаҙлыҡ, кисен күл янына тыя ине, бармағыҙ, тип. Ул һуҙып бер төрлө һөйләгәндер, мин бит ҡабаланам.

Борон-борон заманда, б-и-и-и-к борон заманда, тип әйтә ине өләсәйем, йәшәгән, ти, бер ир менән ҡатын, ти ине. Эйе, балалары булғас ҡына, бабай, әбей була улар. Ир менән ҡатын йәшәгән, ти. Аш бешереп ашауҙы, сәй ҡайнатып, сәй эсеүҙе белмәгән, ти ине. Тотҡан һунарҙан алып ҡайтҡан йәнлектәрен боտарлап ашаған, ти. Уларҙың күп тә тормай ике улдары булған, кесе улдарының исеме Урал булған. Һунарға киткән ваҡытта ике улын ҡалдырып киткән. Тапҡан малының ҡанын, шунда һауыт табып, ҡалдырып киткәндәр. Мөгөҙ һауытынамы инде. Балаларына эсмәҫкә ҡушып китәләр. Ә өлкән улы тыңлауһыҙ була, эсеп ҡарайыҡ, ти.

— Мөгөҙ һауыттан элек ирҙәр эсемлек эсә инеме?

— Эйе, мөгөҙ һауытта, аны үҙем күргәнем булды.

— Ә ҡанды нимәгә һалып ҡалдырғандар һуң?

— Ҡапырсаҡ түгел ул. Ботарлап ашағандар... Ә ҡанды баш һөйәгенә һалғандар! Баш һөйәгенә, эйе, эйе, тотоп ашаған хайуандың баш һөйәгенә һалып ҡалдырғандар. Ҡанды ашамаҫҡа ҡушҡандар (ата-инәләре). Оло улы тыңлауһыҙ булған, ҡанды эскән. Ана шунан бар бит әйтеү "Атай тапҡан йәл түгел, үҙең тапҡан мал түгел!" Йайлап һөйләй ине өләсәй.

— Һөмәйрә кем була, оҙаҡ йәшәйме?

— Эйе. Баяғы Хызыр Ильяс ярҙам иткәндер уға.

Теге һөлдә. Үлә алмай ҡаңғырып, тиңкерәп, һәлберәп йөрөгән бер һөлдәне осрата бит Урал батыр. Йыйһаң, ҡаны бер ҡалаҡҡа ла тулмаҫ, һемереп алһаң, бер ҡашыҡ та булмаҫ, ти. Әҙ генә ите бар микән инде. Шулай ти ине заманында өләсәйем, баяғы, иҫләп алып һөйләмәгәс, онотолған ерҙәре лә күп инде уның.

— Сыбаға осташыу нимә була ул?

— Оҙон таяҡ тотоп, ҡул ҡуйып, алмашлап... ҡуялар. Кем осҡа сыҡһа, шул була. Өләсәйем сыбаға, ти ине. Бәлки, таяҡ, бәлки, билғау. Әсәйемдең атаһы Таймасов Һаҡҡолдан ишеттем. Атайы бик сәсән телле кеше булған. Өләсәйемдең бөтөн ҡыҙҙары йырсы булды. Хәҙер ул Ерәнағас (Ҡарағай) юҡ ул ауыл. Өләсәйем ҡараһүҙ тип әйтте, ҡобайыр тимәне.

Шулай, Уралды ерләп ҡуйғас, йәшәп ята, ти, халыҡ. Матур ерҙәрҙе ҡалдыра бит Урал. Уралды маҡтап шулай әйткәндәр ти:

Уралып ятҡан Уралда
Бейек ҡая тауҙар бар,
Йәйрәп ятҡан ҡырҙар бар,
Ҡуйы ҡара урман бар,
Урманының эсендә
Айыу, бүре, төлкө бар,
Теләгән бер яныуар бар,
Менәм тиһәң, толпар бар,
Сөйәм тиһәң, шоңҡар бар,
Бар, бар, бар! Бар, шоңҡар бар!
Уралып ятҡан Уралда
Төрлө-төрлө юлдар бар.
Атылып сыҡҡан шишмә бар,
Сылтырап аҡҡан йылға бар,
Шомло тәрән күлдәр бар,
Ҡоштарына ағасы бар,
Күбәләккә гөлө бар,
Дауаға ла һөлөгө бар,
Бар, бар, бар! Һөлөгө бар!
Уралымдың ҡуйынында
Алтын да, баҡыр ҙа бар.
Уралымдың буйында
Бай ҙа бар, бахыр ҙа бар,
Байығам тип, тир түккән
Ялсы ла, фәҡир ҙә бар,
Бар, бар, бар! Фәҡир ҙә бар!
Уралымдың аҫтында
Тимер ҙә, көмөш тә бар.
Уралымдың өҫтөндә
Яһил да, еңмеш тә бар,
Хаин да, иблис тә бар,
Талаш та, ыҙғыш та бар,
Һуғыш та, үлеш тә бар,
Бар, бар, бар! Үлеш тә бар!
Уралып ятҡан Уралда
Икәү бергә серләшеп,
Өсәү бергә һөйләшеп,
Һандуғастай һайрашып,
Күгәрсендәй гөрләшеп,
Сыйырсыҡтай эркелешеп,
Ҡыр ҡаҙындай теҙелешеп,
Иртәһен иртәләгән,
Ҡолондарын бәйләгән,
Бейә һауып йәйләгән,
Һылыу, һылыу ҡыҙҙар бар,
Бар, бар, бар! Һай, ҡыҙҙар бар!
Уралып ятҡан Уралда,
Күрәгәһен алға алып,
Дуҫ-иштәрен янға алып,
Кәрәкһә, йыйын йыйған,
Бейеүсене бейетеп,
Йырсынан йыр йырлатып,
Сәсәндән һүҙ һөйләтеп,
Ҡурайсыны уйнатып,
Эсер сәйен һыуытып,
Бар донъяһын онотоп,

Йыйылышҡан ҡарттар бар,
Бар, бар, бар! Ҡарттар бар!
Уралып ятҡан Уралда
Аҡбуҙаттай ат менеп,
Ҡарсығалай тау елеп,
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Ҡәрәк-ярағын юлға алып,
Һайыҫҡандай һаҡ булып,

Торналай тоғро булып,
Булырҙай менән дуҫлашып,
Булмаҫтай менән үсләшеп,
Тыуған илгә дошман килһә,
Яуға сығыр улдар бар,
Яуға сығыр улдар бар,
Бар, бар, бар! Батырҙар бар!

Бына шулай маҡтағандар, ти, халыҡ Уралды. Борон йәшәгәндәр, әле йәшәй, ти, киләсәктә лә йәшәрбеҙ, тип дан йырлай, ти, халыҡ".

Бына ошондайын мәшһүр йөрәк, ҡеүәтле хәтер эйәһе Әсмә Мәүләнбирҙе ҡыҙы Усманова, шулай итеп, XXI быуаттың билгеле бер оло шәхесе булып тарихҡа инеп ҡала. Сөнки тере хәтерҙән, телдән телгә һөйләнеп килгән изге аманатты тапшырҙы ул.

Фәҡәт телдән (китаптан түгел!), тере хәтер буйынса тапшырылыуында ошолай һөйләнә алыуы эпосты теге йәки был халыҡтың ғына милли рухи паспорты тип таныта! Һәм бына, күпме эҙләй торғас, ул хәтер хазинаһы килеп сыҡты. Аллаһының күп рәхмәте яуһын Әсмә инәйгә, ә Мөьминә инәйҙең йәне йәннәттә булһын!

Ғилми анализ алдағы хеҙмәттәрҙә киңерәк булырын әйтеп, һүҙҙе тамам ҡылабыҙ. Ә инде эпос тәбиғәтенә ятып торған ифрат йәтеш, борондан килгән көйлө һамаҡтарҙы — "Урал батыр" эпосы көйҙәренең нота текстары ла сығыр.

## Иҫкәрмәләр

[1] *Кондыбай С.* Мифология предказахов. — Алматы, 2011. Т.1. — С.186.

[2] БХИ. Әкиәттәр. III т. — Өфө, 1978. — 117—125-се бб.

[3] *Генон Р.* Символы священной науки. — М.: Беловодье. 2002. — С.142—145.

[4] *Шефер Э.* Золотые персики Самарканда. — Ташкент, 1981. (ҡар.; С.Кондыбай. Мифология предказахов. — Алматы, 2008. — С.28).

[5] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Төҙ., баш һүҙ, аңлатм. авт-ры Ә.Сөләймәнов, М.Сәғитов, Р.Рәжәпов. — Өфө: Китап, 1998. — 93-сө б.

[6] *Кондыбай С.* Мифология предказахов. 4 т. — Алматы. 2007. — С.33.

[7] БХИ. Әкиәттәр /Төҙ., аңлатмалар авторы Н.Зарипов, М.Минһажетдинов. — Өфө, 1978. — 245—247-се бб.

[8] *Липец Р.С.* Образ батыра и его коня в тюрко-монгольском эпосе. — М., 1984. — С.125; Емельянов И.В. Сюжеты якутских олонхо. — М., 1980. — С.22—46.

[9] БХИ, 1998, 93-сө б.

[10] Шунда уҡ, 92-се б.

[11] Шунда уҡ, 92-се б.

[12] Шунда уҡ, 93-сө б.

[13] *Мөхәмәтжанова Л.Х.* Ҡазан татарҙарының дастандарында боронғо төрки-иран әҙәби-мәҙәни бәйләнештәре сағылышы // "Урал батыр" — духовное наследие народов мира. Матер. III межд. научно-практ. конф. — Уфа, 2011. — С.260.